✓ ***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Февралдә һәм мартта 2013 йылдың икенсе яртыһына тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән гәзитебеҙгә яҙылырға була. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йыллыҡҡа яҙылыу хаҡы - 360 һум 24 тин. Шулай уҡ тәүге ярты йыллыҡта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 мартҡа тиклем яҙылһа, гәзитебеҙҙе апрелдән алдыра башлау мөмкинлегенә эйә.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 ФЕВРАЛЬ - 1 МАРТ
(ШАҠАЙ - БУРАНАЙ)
2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№8 (530)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Утһыҙ төтөн сыҡмай...**



3

**Маҡсатым шундай:**

Токио университетында башҡорт телен уҡытыу



5

Холкобоҙҙағы ҡәтғилек, талапсанлыҡ - атайыбыҙҙан,

хисле, ярҙамсыл булыуыбыҙ - әсәйебеҙҙән...



8-9

**Ауыл балалары...**

һырғалаҡта шыуһын, тип



12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Ир-егеттән азаматлыҡ китһә,***
***Азатлығы бөтә, халҡы бөтә.***
***Халҡы бөткән ирҙең "Ир-егет" тип***
***Аталырға мәгәр хаҡы бөтә.***

***Тамара ҒӘНИЕВА, шағирә:*** Был юлдарға өҫтәп, тағы ни әйтәһең - ысынлап та, тап шулай бит. Мин үҙ ижадымда ир-егеттәргә арыу ғына маҡтау йырлайым. Мәгәр шиғриәтемдәге ир-егет образы үҙе матур, үҙе батыр һәм мин, ҡатын-ҡыҙ булараҡ, уға өмөт һәм ышаныс менән бағам. Мәғлүм ки, ирҙәре мәхлүк ил мандып китә алмай. Ә бит донъялағы бөтә диндәр тәғлимәттәре, донъя фәлсәфәһе тарафынан ир-ат менән ҡатын-ҡыҙ роле, улар башҡарған вазифалар бер ҙә юҡҡа ғына аныҡ билдәләнеп сыҡмаған! Ирҙәргә донъя фәнендә лә хәрәкәт һәм бәрәкәт сығанағы, яңылыҡҡа ынтылыусы, хыял итеүсе һәм хыялды тормошҡа ашырыусы енес тигән билдәләмә бирелә. Ир-ат - ғаилә ҡото. Ә ҡатын-ҡыҙ -кешелектең йәме һәм дә йәне. Шуға күрә, ирҙәребеҙгә донъяға мөнәсәбәттәрен үҙгәртергә ваҡыт етте. Әгәр милләтебеҙ ир-егет ролен кәмһетһә, һанға һуҡмаһа, уның идеалдарын ҡыйратып торһа, беҙ артабан өҫтөнлөктәрҙе юғалтасаҡбыҙ. Әлбиттә, һәр ҡатын-ҡыҙ үҙенең мөмкинлектәрен тормошҡа ашырырға теләй ул, ләкин улар глобаль мәсьәләләр менән сағыштырырлыҡ түгел. Ә донъялағы глобаль үҙгәрештәр бөтәһе лә ир-атҡа бәйле. Иғтибар иткән булһағыҙ, минең шиғриәтем тотошлайы менән ир-егеттең юғары рухына һоҡланыуға бағышланған.

***Иҙрис НОҒОМАНОВ, яҙыусы, Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылы:*** "Һай, азамат!", "Азамат ир икәнһең! ","Ир азаматы!" - халҡыбыҙ борон-борондан иң ҡыйыу, баш-баштаҡлыҡҡа баш бирмәҫ ҡаһарман улдарын ошо һүҙҙәр менән мәртәбәләгән. Азатлыҡ, бойондороҡһоҙ йәшәйеш өсөн йәнен аямай айҡашҡан ир-егеттәр азаматтарҙың азаматы һаналған. Азамат ирҙәр ил тотҡаһы булған. Бөгөн бармы һуң арабыҙҙа халҡын әйҙәр ир-егеттәр? Бар, әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙың һаны кәмей. Ирҙәребеҙ бөгөн күберәген ҡатын-ҡыҙ ҡылыҡлы була бара һымаҡ.Тормош ваҡ-төйәктәренә биреләүсәнлек, мөлкәт артынан артыҡ ҡыуыу, килделе-китteле һүҙ йөрөтөү ир-азаматтарын һис биҙәмәй. Балиғ булып та өйләнмәй йөрөгән иргә Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) ләғнәт уҡыған. Күпме бөгөн шул ләғнәтте күтәреп йөрөүселәр! Күҙе-башы шешенеп, йөҙөн һаҡал баҫҡан, әсәй пенсияһына көн күргән иргә нисек итеп азамат тип әйтмәк кәрәк? Ул бит үҙенә генә түгел, халҡына ла оло зыян килтерә. Ундайҙар демографияға ла кире йоғонто яһай. Һуң булмаҫ элек иҫегеҙгә килегеҙ, егеттәр! Ир азаматы тигән ғорур яңғыраған юғары исемде кире ҡайтарайыҡ. Был беҙҙең ҡулдан килерлек бурыс.

**(Дауамы 2-се биттә).**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЫСЫН ИР-ЕГЕТТӘРҘЕ...

## кадет корпусы тәрбиәләй

**Ватанды һаҡлаусылар көнөн Ишембай ҡалаһындағы Республика кадет мәктәп-интернаты уҡыусылары ла үҙ байрамылай ҡабул итә. Хәрби-патриотик йүнәлештәге тәрбиә биреүсе уҡыу йортон тамамлаған уҡыусылар артабан Рәсәйҙең алдынғы хәрби уҡыу йорттарына уҡырға инә, Рәсәй Ҡоралы Көстәре сафтарында командир вазифаларында хеҙмәт итәләр. "Кадет дуҫлығы армия дуҫлығына ҡарағанда ла көслөрәк", - ти бында уҡыусы егеттәр. Дисциплина, физик күнекмәләр, туғанлыҡ тойғоһо, уҡытыусыларҙың һәм офицерҙарҙың тырышлығы әле быуындары нығынып та етмәгән бәләкәй малайҙарҙан ысын Ватан һаҡсыларын, илһөйәрҙәрҙе тәрбиәләй. Байрам алдынан 9-сы, 11-се синыфта уҡыусы кадеттар менән осрашып, Ватан, милләт, әрме, ғаилә хаҡында фекер алыштыҡ.**

**(Дауамы 4-се биттә).**



КЕНДЕГЕ БЕРЕККӘН...

# ...ЭШЕНӘ



**Ауылда үҫкәс, теләйһеңме-теләмәйһеңме, кендегең бәләкәйҙән эшкә берегә. Шуға ла колхоз-совхоздар тарҡала башлағас, үҙем һымаҡ кендеге эшкә берекккән туғандарым менән кәңәшләшеп, һәр беребеҙ ер, техника алып, бер хужалыҡ булып айырылып сыҡтыҡ. Күмәк хужалыҡта кәрәк-ярағын юллап туплаған тәжрибә, булдырған танышлыҡ-бәйләнештәр үҙ эшемдә лә ярап ҡалды.**

Колхоз-совхозда эшләгәнде лә, эшләмәгәнде лә аҡса алһа, үҙ эшеңдә бындай хөрриәт юҡ - юҡҡа ғына, аяғың тыпылдамаһа, ауыҙың шапылдамай, тимәгән халыҡ. Бөтөн нәмәне үҙеңә юлларға, үҙеңә табырға, үҙең хәл итергә кәрәк. Хатта көн менән төндә, төн менән таңды ялғап эшләгән ваҡыттар ҙа булғылай. Шуныһы мөмкин дә түгел, сөнки һинә берәү ҙә килтереп бирмәйәсәк. Тәүҙә үк ошо "тәгәрмәс эсендәге тейен" темпын алғанғамы икән, хәҙер мин бер минут та эшһеҙ тора алмайым. Эшем булмаһа, нығыраҡ арығандай тоям үҙемде. Хатта ашағанда ла башҡалар кеүек тыныс ҡына ултырып ашай алмайым: йә калькуляторҙа ниҙәлер иҫәпләргә, йә ҡапыл иҫкә килеп төшкән мөһим мәсьәләне шунда уҡ хәл итер өсөн телефондан шылтыратып алырға кәрәк. Дәүләткә йәки кемгәлер ялланып эшләгәндә көндәрҙе ялдан-ялғаса, байрамдан-байрамғаса һанағанда, минең өсөн ял да, байрам да юҡ.

Йыл миҙгеленә ҡарап, эшселәр йәлеп итергә лә тура килә. Ләкин улар әллә ялҡаулыҡҡа өйрәнгән, әллә элкәләре йоҡа - күңел биреп эшләргә тырышҡандары бик һирәк. Әлбиттә, үҙем эшһеҙ тора алмағас, эшселәремә лә талаптарым ҡаты, уларға килеп күренеп, көн оҙоно ҡыл ҙа ҡыбырлатмай йөрөгәндәре өсөн түгел, һөҙөмтә өсөн аҡса түләйем. Ауылда башҡа эш урыны, эшләрҙәй производство булмағас, аңлаған кеше йөбешеп, тырышып ятыр ине, әммә күптәр, шул байҙы байытып, тигән сикләүҙәрҙән ары китә алмай. Ә бит аҡса уларҙың ҡулына килеп ингәнгә тиклем күпме эшләргә - тәүҙә ниндәйҙер эш йәки объект табырға, уның буйынса килешеү төҙөргә, сметалар эшләргә, барлыҡ инстанцияларҙы үтергә, отчеттарын бирергә, һалымын күсерергә һ.б.; үҫемлекселек, малсылыҡ менән шөғөлләнәһең икән, ер һөрөүҙән башлап йәшелсә-емештәренде, итеңде алып барып һатып, уны аҡсаға әйләндергәнгә тиклем күпме ишекте асып инергә кәрәк икәнен берәү ҙә уйлап ҡарамай.

Тағы шуны ғына өҫтәп әйтер инем: дәүләткә йәки кемгәләр ялланып эшләгәндә кендегең эшенә берегеүе бик икеле, сөнки йә һине эштән бушатыуҙары ихтимал, йәки үҙ теләгең менән сығып китеү хоҡуғына эйәһең, ял бирһәләр - ял итәһең, бирмәйҙәр икән - сабыр ғына көтәһең. Быны мин эшкә кендегең берекккәнлек тип түгел, ә эшкә бәйлелек, тип атар инем. Ә ысын эштең төмән бары тик үҙеңә эшләгәндә генә татыйһың, күпме аҡса кәрәк - үҙең билдәләйһең, күпме кешегә матди йәки кәңәш менән ярҙам итергә теләйһең - үҙең хәл итәһең, ғаилә бюджетына күпме килем һалырға - үҙең ҡарайһың, гаражыңда нисә машина булырға тейеш - үҙең хыялланаһың һәм хыялыңды тормошҡа ашыраһың, ҡайҙа, ҡасан ял итеүең дә үҙеңдән тора. Шулай уҡ эшләгән эштәрең тураһында маҡтанып, ҡыҫҡырып йөрөргә тейеш түгелһең, тигәне лә бер шарт - күҙ тейеүе йә көфөр булыуың мөмкин. Шуға ла был мәҡәлә аҫтына үҙ исемемде яҙмағанға ғәфү үтенәм.

ЯҢЫ БАШҠОРТ.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Ир-егеттән азаматлыҡ китһә,***
***Азатлығы бөтә, халҡы бөтә.***
***Халҡы бөткән ирҙең "Ир-егет" тип***
***Аталырға мәгәр хаҡы бөтә.***

(Башы 1-се биттә).

***Таһир ИШКИНИН, Өфө ҡала округы хакимиәте мәғлүмәт-аналитика идаралығының баш белгесе:*** Бөгөн ир-егеттең көслө зат икәнен, ир-ат икәнен йылына бер тапҡыр ғына, унһы ла 23 февралдә байрам иткәндә, Ватанды һаҡлаусылар көнө уңайы менән генә иҫкә төшөрәләр. Ҡайҙандыр "Ирҙә ир иткән дә, хур иткән дә - ҡатын" тигән әйтем килеп сыҡты. Шул "халыҡ аҡылына" арҡаланып, бөгөн ир-егеттәрҙе тапапмы тапайҙар. Бөтөрөпмө бөтөрәләр. Йәнәһе, теләһәм, ир итәм, кәрәк икән, хур итәм. Быға тиклем ир-егеттең азаматлығы ҡулына ҡорал тотоп, ғаиләһен, ырыуын, илен, халҡын дошмандарҙан яҡлағанда күренә ине. Көсө-ҡеүәте иһә донъя көткәндә ҡатын-ҡыҙ башҡара алмаған донъяуи эштәрҙе атҡарғанда һиҙелә ине. Бөгөн йәмғиәткә лә азаматтар кәрәкмәй. Ҡатын-ҡыҙға ла.

Эш нимәлә һуң? Һуңғы бер нисә быуын ир-егеттәр ҡатын-ҡыҙҙар тарафынан тәрбиәләнә. Тәбиғи, уларға башлыса ҡаты ҡуллылыҡ, талапсанлыҡ, хатта һуғышсанлыҡ һыҙаттары, үҙенекен һүҙ итеү, маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу һәләттәре түгел, ә йомшаҡлыҡ, компромисс эҙләү һыҙаттары һеңдерелгән. Малай саҡтан һуғышып түгел, ә ярашып килешеү рухында тәрбиәләнгән егеттәрҙән нимә өмөт итәһегеҙ һеҙ? Тағы ла. Улар башлыса ғаилә ҡаҙнаһын ҡатын-ҡыҙҙар ҡымтып тотҡан һәм бүлгән ғаиләләрҙә тыуып үҫкән. Ниндәйҙер бер мәлдән ғаиләнең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡатын-ҡыҙ хәл итә башлай. Ир-егеттәрҙең бөгөнгө хәленең тамырҙары тап ана шул ваҡытҡа барып тоташа ла инде. Хатта байрамға тап ҡырынғыс һәм күбек бүләк итеүҙәре лә бушҡа түгелдер. Ир-егетлектәре танау аҫты менән эйәктәрендә лә күренеп тормаһын, сикәләре ҡатын-ҡыҙҙарса ялтырап торһон, тигәнерәк мәғәнә һалып бүләк ителәлер йылдан-йыл был бүләктәр.

Ваҡытында, үткән быуаттың 70-се йылдар башында, Таулыҡай ауылы мәктәбендә тиҫтәләгән ир уҡытыусы булды. Уларҙың күбеһе Бөйөк Ватан һуғышы ҡырҙарынан ҡайтҡан уҙамандар ине. Колхоз идараһында хатта бухгалтерҙар ҙа ир-егеттәр булды. Һәм был йәмғиәт тарафынан ыңғай ҡабул ителә ине. Ҡатын-ҡыҙҙар ҡайҙа булды, тип һорайһығыҙмы? Улар бала көтә ине. Ауылда биш балалы ғаилә ғәҙәти һаналды. Өс баланы балаға ла һанамайнылар. 9-15 балалы ғаиләләр булды. Әле уҡытыусылар араһында ир-егеттәр бармы? Уҙа китһә, мәктәп директоры, хеҙмәт һәм физкультура уҡытыусылары. Интернаттарҙы, балалар йорттарын әйтәһе лә түгел.

Бөгөн ир үҙенә-үҙе хужа түгел. Улай ғына ла түгел, үҙ балаларына ла тулы хоҡуҡлы атай була алмай. Бер-бер хәл була ҡалһа, ғаилә тарҡалған осраҡта балалар бер ваҡытта ла (!) аталары менән ҡалдырылмай. Ир-егеттең берҙән-бер азаматлығы тороп ҡалды. Юҡ, һеҙ уйлаған нәмә түгел. Ул да булһа, ай-ай ярымлап ситтә йөрөп, аҡса эшләп, фашистарҙың башына еткән еңеүселәр ҡиәфәтендә ҡайтып инергә. Эшләп алып ҡайтҡан аҡсаһын эсеп туҙҙырғас иһә, әсиргә төшкән кеүек, баштарын баҫып, кире Себергә эшкә китергә. Аяныҫмы? Аяныс...

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

ӘЙҘӘ...

# УҠЫТЫУСЫ ЭШЕ...

## ысын ир-егеттәр һөнәре ул

**Ҡиммәттәр үтә лә йыш алышынып торған заман мәктәптән ир-атты ҡыҫырыҡлап сығарҙы ла, уҡытыусы һөнәрен ҡатын-ҡыҙ һөнәренә әйләндерҙе лә ҡуйҙы. Әлбиттә, бында гүзәл заттың һис ғәйебе юҡ, йәнәһе, аҡсаһы аҙ, абруйлы түгел, тигән һылтау менән ир кеше уҡытыусы булып эшләргә теләмәгәс, ҡалайтһың, балалар уҡытыу һәм тәрбиәләү эшен үҙ иңендә күтәрергә мәжбүр булды. Ә ысынында иһә, мәктәптә ир-егет уҡытыусылар эшләүе йәмғиәт өсөн бик кәрәк, шуға ла уларҙы мәктәпкә, мәғрифәтлек эшенә ҡоҙаларға самалайбыҙ.**

Һуңғы йылдарҙа егеттәрҙең уҡытыусы һөнәрен һайларға тырышмауы, ир-ат уҡытыусыларҙың икенсе эшкә күсеп бөтөүе тураһында күп һөйләйбеҙ. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, был үҙенә күрә ҙур ғына проблема икән дә баһа. Эш бында бәләкәй хеҙмәт хаҡында ла түгелдер, сөнки бөгөнгө мәктәп уҡытыусыһының эш хаҡы насар тип тә әйтеп булмай, һәр хәлдә, республиканың бюджет өлкәһендә эшләүсе уртаса хәлле кешенеке кеүек. Бында барыһы ла ябайыраҡ, ахыры. Был нисек кенә үкенесле яңғырамаһын, бөгөнгө ир-егет үҙенең өҫтөнә яуаплылыҡ алыуҙан ҡурҡа. Шуға ла ғаиләлә лә, мәктәптә лә балаларҙы ҡатын-ҡыҙҙар тәрбиәләй. Шуға ла улар ғаилә ҡоторға ашыҡмай. Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар, ирҙәрҙең абруйын күтәрәйек, тип ҡыҫҡыра башланы. Тик ул абруйҙы ҡатын-ҡыҙ түгел, ир-ат үҙе күтәрергә тейеш түгелме икән һуң? Эше менән, ҡылығы менән, холҡо менән...

Мәктәптә ир-егет уҡытыусы дисциплина булдырыу өсөн генә кәрәк түгел. Был малайҙар менән ҡыҙҙар дөрөҫ социализация үтһен өсөн мөһим шарт. Мәктәп менән балалар баҡсаһы, ғаилә кеүек үк, йәмғиәттең бәләкәй генә бер моделе. Ҡатын-ҡыҙ өҫтөнлөк алған модель, асылда, дөрөҫ түгел, бынан күп социаль проблемалар ҡалҡып сығасаҡ. Малайҙарҙы составы буйынса ҡатнаш коллективта тәрбиәләү кәрәклеге менән күптәр килешер, моғайын. Улар мәктәптә лә көсһөҙ затҡа ихтирам менән ҡараған көслө ирҙәрҙе күрергә тейеш.

Ғөмүмән, уҡытыусы булыу - бик яуаплы эш. Ул - ысын ир-егет һөнәре. Шуға, әйҙәгеҙ, егеттәр, киләсәк быуынды тәрбиәләү эшенә беҙ ҙә үҙ өлөшөбөҙҙө индерәйек, был мәсьәләгә битараф булмайыҡ.

Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанға эш визиты менән Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич килде. Уның менән осрашыуҙарҙа экономик кластердағы торлаҡ төҙөү һәм күп балалы ғаиләләргә ер участкалары бүлеү мәсьәләләре тикшерелде. Төбәк етәкселеге һәм республика Хөкүмәте вәкилдәре менән осрашыуҙа бюджет тураһында һүҙ алып барылды. Бынан тыш, Михаил Бабич 1-се Республика балалар йортона барҙы, республиканың интернат учреждениелары етәкселәре менән етем балаларға торлаҡ бүлеү, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы ғаиләләргә урынлаштырыу, интернат учреждениеларын тамамлаусыларға ярҙам күрһәтеү, социаль етемлекте иҫкәртеү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Башҡортостандың Мәскәүҙәге яҡташтар берлеге бөгөн бер меңгә яҡын кешене берләштерә. Бында өс төп йәмәғәт ойошмаһы эшләп килә. Улар - "Башҡортостан яҡташтар берлеге", "Мәскәү башҡорттары" һәм Башҡортостан Республикаһы студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы. Ошо көндәрҙә Башҡортостандың Рәсәй Президенты янындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле һәм БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары итеп Григорий Куранов тәғәйенләнде. Һәм яңы вазифалағы тәүге эш көндәрендә үк ул Башҡортостандың Мәскәүҙәге яҡташтар берлеге ағзалары менән танышыуҙы мөһим тип тапты.

✓"Рәсәй Федерацияһында телерадиотапшырыуҙарҙы үҫтереү" федераль программаһы буйынса республикала цифрлы телерадиотапшырыуҙар селтәренең яңы объекттары төҙөлә башлаясаҡ һәм инвестициялар күләме 1,5 миллиард һум тәшкил итәсәк. Был хаҡта БР Хөкүмәте ултырышында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, программа 2015 йылға тиклем иҫәпләнгән - был ваҡытҡа Рәсәй халҡының 97 проценты сифатлы цифрлы телеканалдарҙы бушлай ҡарау мөмкинлегенә эйә булырға тейеш. БР Мәғлүмәт технологиялары буйынса агентлығы етәксеһе Илдар Ямалов һүҙҙәренсә, каналдар һаны 20-гә тиклем етәсәк. Әле ике мультиплекс - 20 каналдан торған пакеттар формалаштырылған, артабан өсөнсөһөн булдырыу планлаштырыла. Республика Башҡортостан юлдаш телевидениеһын беренсе йәки өсөнсө мультиплексҡа индереү тәҡдиме менән сығыш яһарға тейеш.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

**Утһыҙ төтөн сығамы? Уты күренмәһә лә, быҫҡыған усаҡтың да төтөнө була, тиер берәү. Һәм ул яңылышмаҫ. Шул уҡ ваҡытта быҫҡыуҙың да яныуҙың бер рәүеше икәнлеген аңлауы ауыр түгел, сөнки баҫылған йә тоҡанып өлгөрмәгән ут быҫҡый. Шуға күрә был мәҡәлдә фәҡәт ғәмәлдәге ут-төтөн мөнәсәбәтендә генә ҡарарға һәм аңларға тырышыу уны үтә ябайлаштырыуға алып килер ине. "Утһыҙ төтөн сыҡмай" мәҡәләнең "Сәбәпһеҙ ҡош осмай" тигән вариантына туҡталһаҡ, бында инде төтөндөң утһыҙ сыҡмауына ғына бәйле хәл түгел, сәбәпһеҙ хатта ҡош та осмаҫы йәғни сәбәпһеҙ бер ғәмәл дә башҡарылмаҫы хаҡында һүҙ барғанлығын аңлай башлайһың. Ысынлап та, донъялағы һәр күренеш, ғәмәл сәбәпһеҙ күҙәтелмәй, башҡарылмай. Бер ваҡытта ла юҡтан бер нәмә лә бар булмай. 15 февраль иртәһендә Силәбе ҡалаһы күгендәге метеорит шартлауын да осраҡлы ғына күренеш итеп ҡабул итергә мөмкинме икән? Философия ҡануны буйынса, һәр бер осраҡлылыҡтың да законлы нигеҙе, сәбәбе була. Әлбиттә, йыһандың үҙ ҡанундары бар. Шулай ҙа ергә табан уҡталған йыһан есеменең ниндәйҙер бөгөлөш яһап, икенсе тарафҡа осоп китеүе, аҙаҡ тағы ла шартлауы уйландыра барыбер...**

# УТҺЫҘ ТӨТӨН СЫҠМАЙ...



"Иртәнсәк өй эсендә ҡапыл тыштың яҡтырып киткәнен күреп сығып ҡарайһам, көнсығыш яҡтан реактив самолет үткәндәге кеүек һуҙылған төтөндө күрҙем. Аҡ болотто хәтерләткән төтөн таралмайыраҡ байтаҡ торҙо. Түбәнгә магазинға барһам, халыҡ аптырашта ҡалған. Ҡайһы берәүҙәре Силәбе янында, имеш, астероид төшөп шартлауы хаҡында һөйләй. Вертолет менән осоп нимәлер эҙләп йөрөгәндәрен дә ишеткәндәр. Силәбелә мәшхәр ҡуптан икән. Барса халыҡ урамға сыҡҡан. Мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында уҡыуҙар туҡтап ҡалған. Беҙҙең яҡтан унда йәштәр күп уҡый. Студенттар ауылдағы ата-әсәләренә шылтырата башлаған. Бәҡтиһән, күп кенә биналарҙың, шул иҫәптән уҡыу йорттарының тәҙрәләре селпәрәмә килеү арҡаһында дүрт көнгә ял биргәндәр. Ҡаланан сығыу һәм тыуған яҡҡа ҡайтыу өсөн автобустар етмәй икән. Бар урында ла тығындар барлыҡҡа килгән. Бынан бер нисә көн элек "Российская газета" һатып алғайным. Уның 23-сө битендә баҫылған "Угроза" тигән мәҡәләлә 15 февралдә диаметры 45 метрлыҡ, ауырлығы 130 мең тонналыҡ астероидтың ергә 26 мең километрға тиклем яҡынаясағы хаҡында уҡығайным. Бәҡтиһән, быйылдың ҙурлыҡтағы космик есемдең ергә яҡынлашыуы тәүге тапҡыр күҙәтелә икән. Астрономдар оптимистик ҡараашта, сөнки астероид ергә етмәйенсә, йүнәлешен үҙгәртеп, кире ғаләмгә юл алаасаҡ икән..."

Был һүҙҙәрҙе миңә 15 февраль көнө Учалы районы ир-уҙаманы, йырауысы Спартак Ильясов шылтыратып әйтте. Ғөмүмән, барыбыҙҙы шаңҡытып һиҫкәнергә мәжбүр иткән был шартлау хаҡында, хәҙер инде ваҡиға үтеп киткәс, төрлөсә фаразлап һөйләүселәр ифрат күбәйҙе. Донъяла нисәмә кеше булһа, шунсама фараз бар, тип әйтергә лә була хатта. Интернетты асып ҡараһаң, монитор экраны төрлөсә фаразларҙан һәм юрауҙарҙан, ырым-ышаныуҙарҙан "сыбар һыйырҙы" хәтерләткәндәй. Мәғлүмәттәр донъяның 12 популяр телендә 443 мең социаль селтәрҙә һәм блогтарҙа миллионлаған хәбәр булып таралған. Уларҙың иң күбеһе Японияла (330 мең хәбәр), АҠШ-та (112 мең ), Испанияла (40 мең), Англияла (34) таралған. Тағы ла шуныһы мөһим: барлыҡ мәғлүмәт таратыусыларҙың 45 проценты был ваҡиғаға юмор күҙлеге аша, 36 проценты ҡурҡып ҡарай, 19 проценты иһә битараф булыуын белдерә. Уларҙың бер нисәүһен генә килтереп үтеү ҙә кеше фантазияһының ни тиклем бай икәнлеген күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта улар етди уйланыуҙарға ла алып килә:

● Был метеорит түгел, ә Спартак Ильясов телгә алған шул уҡ көндө ергә яҡынаясаҡ 2012 ДА14 һанлы астероидтың ярсыҡтары йә уны оҙата килеүсе космик есемдәр-тамсылар икән. Шул уҡ көндә был "тамсылар"ҙың Англия, Гәрәбстан, АҠШ, Куба территорияһына ла "тамыуы" мәғлүм булды;

● Берәүҙәр Силәбе өҫтөндәге шартлауҙы АҠШ-тың уңышһыҙ ракета һынауҙары тип аңлатырға маташһа, икенселәр быны үҙебеҙҙекеләрҙән күрә;

● "Ваҡыт машинаһы" төркөмө етәксеһе Андрей Макаревич иһә, кемдер ерҙә башҡарған үҙенең ҡырын эшен фашламаһындар өсөн кешелектең иғтибарын 3-4 көнгә, бер аҙнаға ҡуҡҡа йүнәлттерә. Йәғни, үҙебеҙсә әйткәндә, кемдер кешелекте шаңҡытып, болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотоп ҡалырға тырыша, йәнәһе;

● Космоэнергет Рауфан Мортазин фаразлауынса, беҙ һуңғы ваҡыт абынып йығылмаҫ өсөн аяҡ аҫтына ҡарап атлап, йыһандың, күк есемдәренең барлығын онотторҡ. Шуға күрә Яралтыусы беҙгә үҙебеҙҙән күпкә ҡеүәтле йыһандың барлығын иҫебеҙгә төшөрә, иҫкәртә. Икенсенән, кешелектең яңырыуы Рәсәйҙә башланырын күҙаллаусыларҙың һүҙен иҫкә төшөргәндә, Рәсәйҙең урта өлөшөн тәшкил итеүсе урында был ваҡиғаның килеп сығыуы ла юҡҡа түгел. Сөнки барлыҡ кешелектең иғтибары ошо урынға йүнәлтеләсәк һәм һөҙөмтәлә тап шул урын энергетик үҙәккә әүереләсәк. Киләсәктә тап ошо ерҙәрҙә кешеләрҙең һәләте асылыуын күҙалларға була. "Арҡайым"дың тап ошо ерҙәрҙә булыуы ла юҡҡа түгел. Бында Силәбе ҡалаһының тарихи Башҡортостандың үҙәгендә урынлашыуын да билдәләп үтергә була;

● Шағир Ирек Кинйәбулатов был ваҡиғаны таш ямғыры яуыуға сағыштырып, "Таш ямғыры" тигән шиғыр яҙҙы. Шул шиғырҙан бер строфа:

*Күрмәгәнен күрә ерем...*
*Ҡәләм алдым, баш ҡаңғырып,*
*Силәбенең өҫтәрендә*
*Яуып киткәс таш ямғыры;*

● Пессимистар, Хоҙай беҙҙе ахырызаманға яйлап өйрәтә, әҙерләй, тип белдерһә, оптимистар, былары инде урындағы халыҡ, эшҡыуарҙар ҡайһылыр урында табылған метеорит ярсыҡтарына юғары хаҡ ҡуйып, үҙ бизнесын йәнләндереп ебәргән, тип был ваҡиғаны яҡшыға юрай;

● Дин әһелдәренең, бигерәк тә ислам динендәге намаҙ уҡыусыларҙың әйтеүенсә, тап ошо шартлау алдынан уларҙы ниндәйҙер көстөң намаҙ уҡырға саҡырыуы иғтибарға лайыҡ. Улар хатта һәләкәттә кешеләрҙең ғүмере ҡыйылыуға юл ҡуйылмауында ошо доғаларҙың ҡөҙрәтен күрә.

**Нимә генә булмаһын, Силәбе ҡалаһы өҫтөндәге шартлау беҙ йәшәгән донъяның бик нескә икәнлеген, телгә ҡайһы минутта, секундта кешелектең оло һәләкәт алдына килеп баҫыу ихтималлығынан азат түгеллеген күрһәтте. Аңғартты. Киҫәтте. Иҫкәртте. "Таш яуһа ла, шулай итәсәгем юҡ..." тип әйтеүҙәр ҙә хәҙер инде тарихта тороп ҡалды...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ӨЙРӘТЕҮҘЕ КЕМ ЯРАТА!

Өгөт-нәсихәт, аҡыл өйрәтеү тигәнде яратмай киттек шул бер мәл. Ғөмүмән, элек тә булғандыр инде был, хәҙер бигерәк йыш күҙәтелгән күренеш: тыңлай белмәйбеҙ бер-беребеҙҙе. Ошо риүәйәттә һүрәтләнә уның сәбәптәре. "Бер саҡ Будда эргәһенә бик белемле, мәҙәниәтле ғалим килгән һәм һорау биргән. Будда хәҙер генә уның һорауына яуап бирә алмауы тураһында белдергән. Ғалим бик ныҡ аптырап:"Ни өсөн яуап бирә алмайһығыҙ, ваҡытығыҙ тармы?" - тип һораған. "Юҡ, ваҡытым етерлек минең, - тигән Будда, - һеҙ минең яуапты хәҙер генә ҡабул итә алмаҫһығыҙ, тип уйлайым". "Ни өсөн?" - тип ныҡышҡан ғалим. "Өс төрлө тыңлаусы була, - тип һүҙен дауам иткән Будда. - Беренсеһе баштүбән әйләндереп ҡуйылған көршәк кеүек: күпме генә һөйләһән дә, уның башына бер ни ҙә инмәй. Икенсе төрлө тыңлаусы төбө тишек көршәк кеүек: уны мәғлүмәт менән тултыраһың, ләкин тишек көршәктә һыу тотҡарланмаған кеүек, һөйләнгән һүҙ ҙә башҡа һеңмәй, файҙаһыҙға елгә осоп бөтә. Өсөнсө тыңлаусы төрлө суп, ҡалдыҡ-ҡолдоҡтар менән тулы көршәк кеүек: уға һыу һалаһың, һыу бысранып, ағыуланып тик тора. Һеҙ тап бына ошо көршәк кеүек. Һеҙ шул тиклем күп белгәнгеҙ, һеҙҙә һеҙҙең тарафтан аҙағынаса аң менән ҡабул ителмәгән мәғлүмәттәр ҙә етерлек. Ул "сүпле" мәғлүмәттәр һеҙгә мин әйтәсәк яуапты ҡабул итергә ҡамасаулаясаҡ..."

"Сүпле" мәғлүмәттәр тигәне - ул төрлө икеләнеүҙәр, шикләнеүҙәр, үпкәләүҙәр, үсәүҙәр, үсегеүҙәр, ҡурҡыу-шөбһәләнеүҙәр, көнләшеүҙәр икенән аңлағанһығыҙҙыр. Беҙҙең күптәребеҙ ошо өсөнсө тыңлаусы һымаҡ түгелме икән? "Сүпле" мәғлүмәттәр бер-беребеҙҙе ишетергә ҡамасаулаймайы икән, тип әйтмәксе инем...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөнөң быйыл 26 февралдән 3 мартҡа тиклем VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары үтәсәк спорт объекттарында булды. "Олимпик-парк" спорт комплексында республика етәксеһе тау саңғыһы спорты буйынса олимпия резервындағы махсус балалар-үсмерҙәр мәктәбен ҡараны. Яңы бина бер йылдан кәмерәк ваҡыт эсендә төҙөлгән.

✓Тиҙҙән республика магазиндарында "Башҡортостан продукты" сауҙа маркаһы менән билдәләнгән продукция һатыла башлаясаҡ. Ихтыяри нигеҙҙә азыҡ-түлек продукттарына "Башҡортостан продукты" билдәһен ҡуйыуға рөхсәт ҡағыҙы биреү тәртибе һәм шарттары тураһында положение БР Хөкүмәте ҡарары менән раҫланған. Быңдай ҡарар ҡабул итеүгә Башҡортостан тауар етештереүселәре продукцияһының урындағы баҙарҙа киң файҙаланылыуы булышлыҡ иткән. Иң мөһиме, "Башҡортостан продукты" сауҙа маркаһы төбәктәге барлыҡ тауар етештереүселәр ала аласаҡ.

✓Өфөгә танылған ғалим, сәйәси һәм ғилми консультант, журналист һәм яҙыусы Нурали Латипов килде. Ул "Нимә? Ҡайҙа? Ҡасан?" спорт-интеллектуаль уйынының Өфөләге ҡатнашыусылары менән осрашып, Башҡортостанда Нобель резервындағы мәктәп булдырырға тәҡдим итте. Һәләтле балаларҙы һәм йәштәрҙе асыҡлау, ғилми элита тәрбиәләү маҡсатында булдырылған Нобель резервындағы мәктәптәрҙә Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең алдынғы педагогтары һәм фән хеҙмәткәрҙәре уҡытасаҡ, тип көтөлә. Балаларға белем биреү хеҙмәттәре бушлай күрһәтеләсәк. Барлыҡ дәрестәрҙә онлайн режимда теләгән һәр кем ҡатнаша аласаҡ.

✓Өфөнөң белем биреү системаһы учреждениелары 2012 йылға йомғаҡ яһаны. 2012 йылдың 1 сентябренә ҡарата республиканың баш ҡалаһында 134 мәктәп эшләй, уларҙа 96 мең бала белем ала. Ҡалала 244 мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы эшләй, уларҙа 48,5 мең бала тәрбиәләнә. Үткән йылда Өфөлә йөмгеһе 970 урынға иҫәпләнгән биш яңы балалар баҡсаһы асылды. Үткән йылда мәктәптәрҙә хәүефһеҙлекте тәьмин итеү мәсьәләһенә ҙур иғтибар бүленде: турникеттар һәм видеокүҙәтеү системалары урынлаштырылды. Биш мәктәп туҡланыу блогы өсөн яңы ҡоралмалар менән йыһазландырылды. Ҡаланан алыҫ урынлашҡан ауылдарҙан 370 бала дәрескә федераль программа средстволары иҫәбенә һатып алынған мәктәп автобустарында йөрөй.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ЫСЫН ИР-ЕГЕТТӘРҘЕ...

## кадет корпусы тәрбиәләй

(Башы 1-се биттә).

### Күнекмәләр сыныҡтыра

**Илнур Мөхәмәтйәнов.** Көнөбөҙ иртәнге ете тулмаҫ борон башлана. Көн һайын командә 2-3 саҡрым йүгерәбеҙ, башҡа төрлө физик күнекмәләр эшләйбеҙ. Һуңынан мәктәп программаһы буйынса дәрестәрҙә уҡыйбыҙ, спорт секцияларында, төрлө мәҙәни сараларҙа ҡатнашабыҙ. Офицерҙар, тәрбиәселәр тарафынан беҙҙә тәртип бик яҡшы ҡуйылған. Бынан тыш, йыл һайын Йөрәктауға ялан күнекмәләренә барып, ҡаяға үрмәләү, һыуға сумыу, окоп ҡаҙыу, башҡа хәрби алымдар буйынса ғәмәли дәрестәр алабыҙ. Былдай ялан күнекмәләре дәресе бар синыфтар өсөн дә мотлаҡ. Шулай уҡ һәр ҡыш саңғыла марш-йүгереүҙәр үткәрелә. 6-8-се синыфтар - 25, 9-11 синыфтар 50 саҡрым араны саңғыла үтергә бурыслы. Марш-йүгереү тактикаһы, радиация-химик-биологик һаҡланыу саралары буйынса белемдәребеҙҙе камиллаштырабыҙ. Тағы ла кадет корпусында хәрби тревогалар иғлан ителеп тора, йәш ҡотҡарыусылар клубы эшләп килә. Мәктәпте тамамлағас, һәр кадетка ҡотҡарыусы-йәмәғәтсе тиған танытма ла бирелә.

**Фәиз Сәлихов.** Кадет мәктәбендә бар яҡтан үҫеү мөмкинлектәре тыуҙырылған. Үҙем саңғы, биатлон, атыу, көс күнекмәләре эшләү буйынса Рәсәй кимәлендә ярыштарҙа призерҙар рәтенә эләктем. Парашюттан һикереү бәхете лә татыны.

**Динар Ғайсин.** Бында ысын ир-егеттәр тәрбиәләнә. Офицерҙар һәм уҡытыусыларыбыҙ беҙҙә аҡыллы, көслө, иле, халҡы өсөн йәнен аямай торған Ватан һаҡсылары итеп үҫтереүгә ҙур көс һала.

### Беҙ әрмене үҙ итәбеҙ

**Фәиз Сәлихов.** Мәскәүҙә ярыштарҙа булғанда беҙҙе бер нисә көнгә Наро-фоминск ҡалаһына хәрби частҡа алып барҙылар. Унда саҡырыу буйынса хеҙмәт иткән һалдаттар менән ялан күнекмәләренә сыҡтыҡ. Улар менән бер казармала йәшәнек. Ашатыуҙары ла, көн тәртибе лә оҡшаны. Командирҙарҙың һәр кемгә шөғөл табып тороуҙарына иғтибар иттем, бер кем дә бушты бушҡа ауҙарып ултырмай тиерлек.

**Артур Әминев.** Бөгөнгө көндә әрме хеҙмәте артыҡ популяр түгел. Егеттәр араһында унан тороп ҡалыу әмәлдәрен эҙләүселәр етерлек. Үҙемә килгәндә, әрмегә барыу - минең изге бурысым, тип һанайым. Мәктәпте тамамлағас, ил алдындағы ошо бурысты үтәгәндән һуң ғына уҡыуымды артабан дауам итәсәкмен.

**Эмил Шакиров.** Ни өсөн күптәр әрмегә барыуҙан ҡаса? Күптәр быны ваҡытты бушҡа үткәреү, тип һанай. Йыл елгә оса, йәнәһе. Хеҙмәт үтеп ҡайтҡандар араһында ла әрмене маҡтап телгә алғандарға ҡарағанда, уны яманлаусылар күберәк. Мин быны сәбәбен илһөйәрлек тәрбиәләгән ҡиммәттәр булмауында күрәм. Бөгөн күп йәштәр аңында, хеҙмәт итеү түгел, хеҙмәттән тороп ҡалыу батырлыҡ, тиган фекер йәшәй.

**Динар Ғайсин.** Ана шундай яман уйҙар кеше башын бутамаһын, егеттәрҙә ватансылыҡ тойғоһо булһын, тиһәк, кадет корпустарында, патриотик клубтарҙа, түңәрәктәрҙә күберәк уҡыусылар шөғөлләнеүе тураһында хәстәрләргә кәрәк. Улар Ватанды һөйөргә өйрәткән иң яҡшы әҙерлек мәктәптәре бит.

### Ғаилә тәрбиәһе хаҡында

**Фәиз Сәлихов.** Баланың ниндәй булып үҫеүе атаәсәнән тора. Ниндәй орлоҡ сәселә, үҫентене нисек ҡарайһың, емеш тә шулай була. Ләкин яуаплылыҡты башҡаларға һалып, үҙебеҙ ситтә ҡалырға тырышыу ҙа дөрөҫ түгел. Һәр беребеҙ үҙе өсөн яуаплы. Атаәсә ғүмер буйы беҙҙе ҡарап йөрөй алмаясаҡ, уларҙың аҡыллы кәңәше лә ҡайһы саҡ беҙҙең ҡолаҡҡа инмәүе мөмкин.

**Артур Әминев.** Ихтыяр көсө булмауы- бик етди етешһеҙлек. Ҡайһы бер малайҙар "Юҡ" һүҙен дә әйтә алмай, эсергә, тартырға тәҡдим итеүселәр арбаһына ултырып, уларҙың йырын йырларға керешә. Бер тапҡыр йомшаҡлыҡ күрһәтһәң, бөттө инде ул. Йәштәштәребеҙҙең тиҙәк тибеп, уйланмай, маҡсатһыҙ йәшәүе әсендерә.

**Эмил Шакиров.** Был егеттәргә киләсәктә атайҙар буларға бит инде. Ниндәй тәрбиә бирәсәк улар улдарына? Эскелеккә бирелеп, балаһын түгел, үҙҙәрен ҡарай алмаған атайҙар күҙ алдына килеп баҫа. Ғаиләнең, илдең терәге була аламы ундайҙар?

**Артур Әминев.** Бөгөнгө көндә көслө заттарҙың ир-егетлек сифаттарын юғалтыуын, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың "көслө" заттарға әйләнеүен күрәбеҙ. Мин быны тәбиғи күренеш тип һанамайым, ир-егеттәрҙең ихтыярһыҙлығы шундай хәлгә килтерә лә инде. Мәҫәлән, ғаиләлә ир-егет эсә, эшһеҙ йөрөй. Өйөнә аҡса алып ҡайтмай, кирелһенсә, йортонда булған әйберҙәрҙе сығарып һата. Ҡатыны ни эшләһен? Бар йөктө үҙ елкәһенә ала ла инде. Ғаиләһен ҡараған ҡатын-ҡыҙ эшкинмәгән иренә үҙе менән идара итергә мөмкинлек бирмәйәсәк. Шуға күрә лә ролдәр алышына.

### Милләт хаҡында

**Динар Ғайсин.** Туған телебеҙҙе һөйөргә, уны яратырға тейешбеҙ. Кеше үҙенең туған телен белмәһә, ул милләте хаҡында уйлап та ҡарамаясаҡ. Туған телендә аралашып үҫкән балалар, икенсе мөхиттә үҫкән милләттәштәренә ҡарағанда, күпкә рухлыраҡ икәнен тәшендәм.

**Артур Әминев.** Бөгөнгө көндә халҡыбыҙға, илебеҙгә индергән өлөшөбөҙ - ул төплө белем алыуыбыҙ. Уҡыуыбыҙ башҡаларға өлгө булғанда, спорт яғынан уңыштарға өлгәшкәндә, ярыштарҙа еңгәндә генә үҙебеҙҙең өлөшөң, бурысың хаҡында һөйләргә була. Шул уҡ ваҡытта киләсәктә тағы ла күберәк эшләргә тура киләсәк икәнен дә аңлайбыҙ.

**Динар Ғайсин.** Балаларҙы милли рухта тәрбиәләгәндә, уларға илһөйәрлек тойғоһон күндергәндә генә битараф булмаған быуын үҫеп сығасаҡ. Беҙҙең кадет корпусы "Шоңҡар" исеме менән йөрөтөлһә лә, үкенескә күрә, унда уҡыған башҡорт балалары кәмей. Республиканың төрлө райондарынан, хатта күрше өлкәләрҙән уҡыусылар килгәндә, яҡын-тирәләге башҡорт ауылдарынан килеүселәр юҡ. Әллә милләттәштәребеҙ бындағы тәртипкә түҙә алмаҫбыҙ, тип, яуаплылыҡтан ҡурҡамы? Былда уҡыу ир-азаматтар сифаттарына эйә булырға, донъяға көслө шәхестәр күҙлегәнән ҡарарға яҡшы мөмкинлек икәнен аңламайҙар, ахырыһы.

### Беҙҙе борсоғаны

**Фәиз Сәлихов.** Ир-егеттәребеҙҙең күпләп Себергә эшкә китеүе күңелдә ныҡ борсой. Әлбиттә, улар ғаиләһен ҡайғырта, аҡса эшләргә тырыша. Ләкин балалары атайҙарын күрмәй үҫә. Күңелһеҙ хәлдәр ҙә булып тора. Башҡортостанда эш урындарын күбәйтеү, хеҙмәт хаҡын арттырыу был проблеманы өлөшләтә хәл итер ине.

**Динар Ғайсин.** Эш юҡ, тип, ауылдарҙа егеттәр эскелеккә бирелә, донъяға ҡул һелтәп ҡарай. Башҡортлоғон юғалтып, маңҡортҡа әйләнәләр. Тыуған иленең, халҡының киләсәге хаҡында уйланып та ҡарамай улар. Баш йүнәтергә берәй һәмә тапһалар, шул етә. Халҡыбыҙҙа Салауат рухын тергеҙергә кәрәк. Йәштәрҙең ҡыйынлыҡтарҙы йырып сығырға көс тапмай, дөйәгош кеүек башын ҡомға йәшереүе хәүефле. Етәкселәр араһында ла йәштәребеҙҙең ошо хәлен аңлаған, йөрәктәре аша үткәргән кешеләр күберәк булһа ине ул.

**Инсаф Дусалин.** Бөгөнгө көндә йәмғиәттә эгоизм көслө. Һәр кем үҙен генә ҡайғыртып йәшәй. Ярайһы ғына килем алған кешеләр ҙә ҡомһоҙлоҡ сире менән ауырый башлай. Ә быға кешеләр араһында туғанлыҡ көслө булһа, улар бер-береһенә ярҙам итергә тырышһа, күп мәсьәләләрҙе хәл итергә булыр ине. Хәйриә аҡсаһына шәхси мәктәптәр, балалар баҡсалары асҡанда ғына милли рухтағы балалар тәрбиәләү һәм туған телебеҙҙе уҡытыу кеүек проблемалар хәл ителәсәк. Сөнки шәхси мәктәп булһа, кемгәләр инәлеп йөрөргә кәрәкмәй. Һәр кемебеҙ ҡулынан килгәнсе халҡым, Ватаным, тип йәшәһә, социаль тигеҙһеҙлек тә булмаясаҡ, иҡтисад та үҫәсәк.

**Илнур Мөхәмәтйәнов.** Иҡтисад тигәндәй, аҡыллы кешеләрҙең сит илдәргә күп китеүе хаҡында йыш ишетәбеҙ. Һөҙөмтәлә был кешеләр икенсе дәүләттәрҙә яңы проекттарҙы тормошҡа ашырып, нимәләр асып, башҡаларға килем килтерә. Ни өсөн беҙ уларҙы үҙебеҙҙә ҡалдыра алмайбыҙ? Ни өсөн уларҙың ҡаҙаныштары беҙҙең дәүләттең иҡтисадын күтәрмәй?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республика кадет мәктәп-интернатының башҡорт теле уҡытыусылары Рәйсә Мөхәмәтова һәм Әнисә Һөйәрғолова менән һөйләшкәндә был егеттәрҙең туған башҡорт теле дәрестәрен дә яратыуы, хатта олимпиадаларҙа ҡатнашып, призлы урындар яулауы тураһында белдек. "Йөрәгендә туған телгә, туған халҡына һөйөү йөрөтмәгән баланан ниндәй илһөйәр тәрбиәләргә мөмкин һуң?! - тине уҡытыусылар. - Киләсәктә хәрби кешеләр, ҡотҡарыусылар булып китерме, йәиһә тыныс һөнәр һайлармы, әммә беҙҙең бурыс - иң тәүҙә белемле, физик яҡтан сыныҡҡан, сәләмәт рухлы, илһөйәр егеттәр үҫтереү. Ә хәрби йүнәлеш - ул бит халҡыбыҙҙың традицияһын дауам итеү генә..."**

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Ағиҙел йылғаһы аша Затон биҫтәһенә илтәсәк яңы күпер төҙөләсәк. Күперҙең оҙонлоғо - 836 метр, күпергә илткән юлдар оҙонлоғо 593 метр тәшкил итәсәк. Унда өс һыҙатлы хәрәкәт ойоштороу ҡарала. Киңлеге - 14,5 метр. Проект буйынса эштәр 42 ай дауам итәсәк. Бөгөнгө көнгә проект-смета документацияһы әҙерләнгән, дәүләт экспертизаһынан ыңғай һығымта алынған. Күпер федераль һәм республика бюджеттары средстволары иҫәбенә төҙөләсәк.

✓Өфөлә бокс буйынса Башҡортостан Республикаһы чемпионаты үтте. Ярыштарҙа Өфө, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Нефтекама, Октябрьский, Мәләүез, Күмертау, Бәләбәй, Белорет, Учалы һәм Баймаҡ ҡалаларынан 20 команда составында 60-тан ашыу спортсы ҡатнашты. Башҡортостандың бокс буйынса баш тренеры Рим Бәшәров иң яҡшы боксерҙарға наградалар тапшырҙы. Артур Собханғолов, Павел Никонов, Данис Латипов төрлө призларға, ә Стәрлетамаҡтың бокс мәктәбе уҡыусыһы, Рәсәйҙең спорт мастеры Эдуард Абдрахманов "Иң яҡшы боксер" кубогына эйә булды.

✓Өфө ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм уның урынбаҫары Альбина Йосопова Рәсәй муниципаль академияһы Президиумының ҡарарына ярашлы, "Урындағы үҙидаралыҡты үҫтереүгә индергән өлөшө өсөн" миҙалы менән бүләкләнде. Юғары наградаһы БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев тапшырҙы.

✓Силәбе өлкәһенең актеры һәм режиссеры Тимур Сәфиуллин "Crossway" тулы метражлы фильмы өсөн Калифорния кинофестиваленең бриллиант призына лайыҡ булды. Енеүселәрҙе наградлау тантанаһы Сан-Диегола (АҠШ) үтте. Былдай тантаналы сара йыл һайын ойоштороla. Фильм былтыр ике ай эсендә Таиландтың төрлө райондарында төшөрөлгән. Бынан тыш, Тимур Сәфиуллин "Кисәгенән тәрәнерәк" ("Глубже, чем вчера") ҡыҫҡа метражлы фильмы өсөн төрлө наградаларға, шул иҫәптән Канн мосолман киноһы фестивале призына лайыҡ булған. Бөгөнгө көндә режиссер Австралияның Мельбурн ҡалаһында йәшәй.

✓2 мартта Хәйбулла районының Таштуғай ауылында мәктәп уҡыусылары араһында Ғаззали батыр Үтәшев призына Милли көрәш буйынса ярыштар үтәсәк. Ярыштарҙа туғыҙ команда ҡатнашасаҡ, тип көтөлә.

*ЯПОНИЯНАН ХАТ*

**Гәзитебеҙҙең быйылғы 3-сө һанында интернеттағы башҡорт Википедияһы хакимы Рөстәм Нурыев Википедияны тулыландырыуҙа әүҙем ҡатнашыусыларҙың бер-нисәһе менән таныштырғайны. Улар араһында Токио Сит Телдәр Университетының төрки телдәре бүлеге талибы Юто Һишияманың башҡорт телендә үҙаллы яҙған ошо хәбәре лә урын алғайны: "Минең исемем Юто. 1990 йылдың 10 авгусында Японияның баш ҡалаһы Токиола донъяға килгәнмен. Туған телем - япон теле. Инглиз, төрөк, татар һәм башҡорт телдәрен уртаса кимәлдә беләм. Ҡайһы ваҡытта Башҡорт Википедияһын уҡыйым. Мин унда ҡулланыусы битендә теркәлдем, үҙем тураһында яҙҙым. Тиҙҙән яңы мәҡәлә яҙа башларға уйлайым. Тик Википедияға яҙыу минең өсөн бер аҙ ауырыраҡ әле".**

# МАҠСАТЫМ ШУНДАЙ:

## Токио университетында башҡорт телен уҡытыу

* * *

Башҡорт Википедияһында әүҙем ҡатнашыусылар тураһындағы мәҡәлә баҫылғандан һуң Ютонан беҙ ошондай хат алдыҡ: *"Хөрмәтле "Киске Өфө" редакцияһы! Һаумыһығыҙ! Минең исемем Юто. Японияла Токио ҡалаһында йәшәйем. Токио Сит Телдәр Университетында уҡыйым. Һеҙҙең сайтты йыш ҡарайым. Минең һеҙгә теләгем бар. Японияла Башҡортостан һәм башҡорттар тураһында белеүселәр бик аҙ. Шуға күрә мин һеҙҙең сайттағы хәбәрҙәрҙе японсаға тәржемә итеп, минең шәхси сайтта урынлаштырып, минең дуҫтарыма күрһәтергә теләйем, әммә һеҙҙән рөхсәт алмайынса тәржемә итеү дөрөҫ түгел, тип уйлайым. Әгәр һеҙгә ҡыйын булмаһа, рөхсәт итә алмаҫһығыҙмы икән?*

*Хөрмәт менән,*
*Юто Һишияма".*

Был хатты, дөрөҫөрәге, ундағы бер хатаһыҙ яҙылған башҡортса тексты ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыныҡ. "Китсәле, үҙе яҙмағандыр..." тип шикләнеүселәр ҙә булды. Шунан Ютоның һорауын ҡәнәғәтләндереп, гәзитебеҙҙәге ҡайһы бер мәҡәләләрҙе японсаға тәржемә итергә рөхсәт биреүебеҙ тураһында хат яҙҙыҡ. Уға бер-нисә һорауыбыҙҙы ла төбәнек. Икенсе көнөнә үк һорауҙарыбыҙға яуап килеп төштө.

* * *

*"Һаумыһығыҙ, хөрмәтле "Киске Өфө" редакцияһы! Һеҙҙең менән хәбәрләшеү мөмкинлеге биргәнегеҙ өсөн бик ҙур рәхмәт! Һеҙҙең һорауҙарға яуаптарҙы яҙҙым.*

**➔ Башҡорт телен ҡасандан өйрәнәһең? Уға ҡыҙыҡһыныу нисек барлыҡҡа килде?**

-Мин бала саҡтан уҡ сит илдәр менән ҡыҙыҡһына инем. Урта мәктәптә уҡыған саҡта сит телдәр менән дә мауыға башланым, айырыуса төрөк телен яраттым. Сөнки төрөк теле латин әлифбаһы менән яҙыла, грамматика ла оҡшаш, шул сәбәпле уны өйрәнеү ауырлыҡ тыуҙырманы. Уны нығыраҡ өйрәнеү өсөн ике мең туғыҙынсы йылда Токио Сит Телдәр Университетының төрөк теле бүлегенә индем. Университетта ике йыл төрөк телен өйрәнгәндән һуң, башҡа төрки телдәрҙе лә өйрәнергә теләгем тыуҙы. Университетыбыҙҙа үзбәк, ҡаҙаҡ, уйғыр телдәре уҡытыла. Уларҙы ла өйрәндем. Ике мең ун беренсе йылдың авгусында интернетта татар йырҙарын ишетеп ҡалдым. Улар миңә бик оҡшаны. Шунан инде татар теле менән ҡыҙыҡһынып, уны өйрәнә башланым.

Интернетта татар матбуғатын уҡыным, телевидение һәм радио тапшырыуҙарын ҡараным, тыңланым. Башҡорт теленең татар теленә бик оҡшаш икәнен белеп ҡалғас, уның менән дә ҡыҙыҡһынып китеп, интернетта уҡый башланым.




Ике мең ун икенсе йылдың август айында "Вконтакте" сайтына теркәлдем. Унда татар, башҡорт телендә аралашырға мөмкинлек тыуҙы. Был телдәрҙе белеүем дуҫтар табырға ла ярҙам итте. Август айында Ҡаҙандан Токиоға килгән бер татар егете мине "Вконтакте" сайтында тапты. Унда аралашҡандан һуң беҙ осрашып, ҡалабыҙ буйлап йөрөнөк.

Мин апрель айында аспирантураға инеп, татар һәм башҡорт телдәрен фәнни яҡтан өйрәнеүҙе дауам итергә йыйынам. Киләсәктә мин университетта татар һәм башҡорт телдәрен уҡытыуҙы маҡсат итеп ҡуям.

**➔ Башҡорт тарихын да өйрәнәһеңдер, моғайын. Япондар менән башҡорттар араһында ниндәй оҡшашлыҡтар бар, тип уйлайһың?**

- Әлбиттә, мин башҡорт тарихын да өйрәнергә теләйем, әммә Японияла башҡорттар тураһында мәғлүмәттәр бик аҙ. Шуға күрә мин башҡорттар тураһында хәҙер ябай ғына итеп беләм. Киләсәктә, башҡорттар тураһында китаптарҙы уҡып, улар тураһында ныҡ итеп өйрәнергә теләйем. Минеңсә, япондар ҙа, башҡорттар ҙа тауҙар, ағастарға бай, матур тәбиғәтле ерҙә йәшәүсе халыҡ. Шуға күрә оҡшашлыҡтар байтаҡ тип уйлайым. Телдәре араһында ла оҡшашлыҡтар бар. Сөнки япон теле грамматика яғынан төрки телдәренә оҡшаш.

**➔ Ниндәй улар япон ир-егеттәре? Ғаиләлә ир-егеттәр башмы, әллә ҡатын-ҡыҙмы? Ир баланы тәрбиәләү буйынса ҡайһы бер алымдар беҙгә ҡыҙыҡ булыр ине, яҙып ебәрә алмаҫһыңмы?**

- Элегерәк күп ғаиләлә ир-егеттәр баш ине. Әммә бөгөн хәлдәр үҙгәрә, ҡатын-ҡыҙ эшләй, белем ала. Ҡайһы бер ғаиләләрҙә ҡатындар ирҙәренән көслөрәк. Боронғо ваҡытта, егеттәр көслө, ҡыҙҙар наҙлы булырға тейеш, тип һаналған ине. Әммә һуңғы йылдарҙа йәштәребеҙҙең тәртибе үҙгәрә, ғаиләлә үҙҙәре теләгән рәүештә тәрбиәләйҙәр.

**➔ Үҙең ниндәй ғаиләлә үҫтең, нисә бала булды ғаиләгеҙҙә? Атай-әсәйең кемдәр? Улар ниндәй тәрбиә бирергә тырышты?**

- Беҙҙең ғаилә нормаль япон ғаиләһе. Ғаиләбеҙҙә өс бала, мин һәм ике һеңлем. Атайым журналист, әсәйем хужабикә. Улар беҙҙе, ирекле үҫһен һәм яҡшы кеше булһындар, тип тәрбиәләне .

**➔ Ғөмүмән, япон ғаиләһендә уртаса нисә бала аҫырайҙар?**

- Уртаса ике бала.

**➔ Юғары белем алыу мотлаҡ бурыс һаналамы?**

- Японияла юғары белем алмаһа, яҡшы эш таба алмайҙар. Шуға күрә күп кеше юғары белем алырға тырыша.

**➔ Йәштәрҙе һеҙҙә лә, иманынан, тамырынан айырылған, әҙәп юҡ, тип әрләйҙәрме?**

- Эйе. Әлбиттә, төрлө йәштәр бар, һәйбәте лә, насары ла.

**➔ Армия хеҙмәтен үтеү ир-егеттәр өсөн ғорурлыҡмы, әллә һеҙҙә лә армиянан ҡасып ҡалыу традицияға әйләнәме?**

- Япония Икенсе донъя һуғышынан һуң армияны ташланы. Шуға күрә Японияла армия хеҙмәте юҡ.

**➔ Ҡарт ата-әсә балалары ҡарауындамы, әллә ҡарттар йорттарына күсереләме?**

-Элекке ваҡытта күп ғаиләлә ҡарт ата-әсә (олатай менән өләсәйҙәр инде. - **Ред.**), ата-әсә балалары менән бергә йәшәгән ине, әммә хәҙерге ваҡытта айырым йәшәйҙәр. Ғөмүмән, ҡарт ата-әсә ауылда, ата-әсә һәм балалары ҡалала йәшәйҙәр.

**➔ Беҙҙәге кеүек, ата-әсәһе тере булып та, етем ҡалған балалар проблемаһы бармы?**

- Беҙҙә шундай проблема юҡ, әммә шуға оҡшаш проблема бар. Бөгөнгө көндәрҙә күп ғаиләлә аталар ғына түгел, әсәләр ҙә эшләйҙәр. Шул сәбәпле күп балалар өйҙә яңғыҙ ҡалырға мәжбүр булалар...

Хөрмәт менән, Юто Һишияма".

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бында Юто Һишияманың хаты үҙе нисек яҙған, шул көйө килтерелде. Ҡайһы бер тыныш билдәләре ҡуйылмауын ғына иҫәпкә алмағанда, башҡортса текст бер хатаһыҙ яҙылған. Юто менән хат алышыу дауам итер, тип уйлайбыҙ. Һәр хәлдә, Япония һынлы Японияла, башҡорт телен өйрәнеп, уны хатта университетта уҡытыу тураһында хыялланған япон егете йәшәп ятыуы тураһында белеү күңелгә ҡыуаныс өҫтәй.**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Дегәнәк



❖ Ауыҙ сайҡатыу өсөн 1 балғалаҡ төнәтмәгә (төнәтмәнең рецебын алдағы һанда ҡарағыҙ) 2/3 стакан ҡайнаған һыу ҡушып, шыйыҡлатырға кәрәк.

❖ Өләсәйем беҙгә яҙ көнө йәш дегәнәк тамырын кишер урынына ашата, яман шештән һаҡлауын аңлата. Бының өсөн уны мотлаҡ таҙартып йыуып, әрсергә кәрәк.

### Аяҡ-ҡул ойоуы

Бер литр эремсек һыуын йылытырға (кистән үк). Ул һыу ни тиклем әсерәк булһа, файҙаһы ла шул тиклем күберәк. Йоҡлар алдынан эремсек һыуын тасҡа ҡойорға, шуның боҫонда аяҡ-ҡулдарҙы 5 минут тоторға, һыуынһа, алдан әҙерләнгән ҡайнар һыуҙы өҫтәп торорға. Аяҡ-ҡулды һөртмәйенсә генә, үҙ яйында киптерергә. Ә иртәнсәк уларҙы йыуып, массаж яһарға. Массаждан һуң бер тасҡа эҫе, икенсеһенә һалҡын һыу һалып, аяҡ табанын, ус төптәрен алмашлап эҫе һәм һыуыҡ һыуға тығып алырға. Быны кәмендә 5-7 минут эшләргә. Аҙаҡтан ҡоротоп, камфара майы һөртөргә һәм таҙа ойоҡ кейергә. Кис тағы процедураны ҡабатларға.

### Диабеттан дауа

1-1,5 ҡалаҡ ҡарабойҙай ярмаһын төйөп, 200 мл кефирға һалып болғатырға һәм шунда уҡ эсергә. Был дауаны иртә һәм кис ашарҙан 30 минут алда көнөнә ике тапҡыр эшләргә.

### Ҡан баҫымын төшөрөү

Сепрәкте алма һеркәһендә йәки 5 процентлы аш һеркәһендә сылатаһың һәм 5-10 минутҡа үксәләргә ҡуяһың. Баҫымды ныҡ төшөрә, үтә мауығырға ла ярамай.

### Организмды таҙартыу

Эштән, донъя мәшәҡәттәренән арып, хәл бөтөп киткәндә дарыу ҡулланмай, үлән менән файҙаланыу яҡшы. 4 ҡалаҡ ҡыҙыл миләш, 3 ҡалаҡ гөлйемеш, 4 ҡалаҡ ҡара ҡарағат, 2 ҡалаҡ әрем (кипкәне лә ярай) алып, ярты литр ҡайнаған һыуҙа төнәтеп, һыуынғас, һөҙәһең һәм көнөнә 3 мәртәбә ярты стакан эсәһең.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

УҠЫТЫУСЫҒА ҠУЛЛАНМА



# ДИН ҺӘМ МӘҘӘНИӘТ

### Егерме алтынсы дәрес: "Ислам мәҙәниәте нигеҙҙәре"

Белемдең ҡиммәте һәм файҙаһы. Кешелек донъяһы бар булғандан алып белемгә ынтылыш булған. Донъяның серҙәренә төшөнөргә тырышыу, ауырыуҙарҙы дауалау өсөн шифалы үләндәр файҙаланыу, йыһан киңлеген байҡау, йондоҙҙарҙы күҙәтеү, өҫ кейемдәре булдырыу, ризыҡ әшкәртеү, йорт-ҡаралты төҙөү кеүек кеше өсөн көндәлек кәрәк-яраҡтан башлап, ете ҡат ер аҫты серҙәрен һәм күҙ ҡарашы етмәҫ йыһанды үҙләштереү кеүек фән һәм техника ҡаҙаныштары - барыһы ла белемгә булған ынтылыштан килә. Бөгөнгө көндә - медицина өлкәһендәге ҡаҙаныштар, компьютерлаштырыу, кәрәҙле телефондар... Тик был ҡаҙаныштар арҡаһында беҙ тәбиғәттән һәм тәбиғи ҡанундарҙан алыҫлашабыҙ. Әйтәйек, тәбиғәттең иң ҙур бүләктәренең береһе - туған тел һәм туған моң. Шулай уҡ Ерҙән алыҫлашабыҙ. Ер бүләк иткән тәбиғи үҫемлектәрҙе: ҡаҡы, ялан ҡуҙғалағы, әтмәкәй, ер еләге, балтырған, кесертҡән ашы ашамай башланыҡ. Тимәк, ер ҡеүәтенән мәхрүмбеҙ. Өлкәндәр менән аралашыу, уларҙың белеменә эйә булыу, улар һөйләгәндә аңлау өсөн үлән-үҫемлектәрҙең, ағастарҙың атамаларын, ҡоштарҙың исемдәрен, йондоҙ атамаларын, мәҡәлдәр, халыҡ иждадын белеү, халыҡ йырҙарын аңлау-йырлау һәм башҡаларҙы белеү мотлаҡ.

### Егерме алтынсы дәрес: "Донъя диндәренең мәҙәниәт нигеҙҙәре"

Донъя диндәренең әхлаҡ ҡанундары. Балаға бәләкәй саҡтан уҡ тоғро юлдың, ҡыйыҡ юлдың ни икәнлеген, атай-әсәй менән һәр ваҡыт асыҡ мөғәмәләлә булыу кәрәклеген аңлата барырға кәрәк. Ошо предмет буйынса дини тәғлимәттәр хаҡында һүҙ барғанда ла бала күңеленә был фекерҙе ныҡ һалырға кәрәк. Заман икенсе, аралашыу үтә лә киң ҡолас алды, бала өсөн мауығыл-аҙашыл китер юлдар күп тә, төрлө лә. Киләсәк быуын өсөн яуаплылыҡ һәр ваҡыт булған, сөнки кешелек донъяһы камиллыҡҡа ынтыла - ә был иһә тәрбиәле киләсәк ҡулында. Ниндәй генә дин тәғлимәте булһа ла йәштәрҙе боҙоҡлоҡтан аралап ҡалыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Донъя диндәренең әхлаҡи ҡанундарының барыһының да маҡсаты бер - кеше әхлаҡлы булырға тейеш. Шул саҡта оло һүҙенән сыҡмаясаҡтар һәм тура юлдан тайпылыуҙар аҙыраҡ булыр.

### Егерме алтынсы дәрес: "Донъяуи этика нигеҙҙәре"

Әҙәп тиғән төшөнсә, ысынлап та, бик киң ул. Был төшөнсәгә илһөйәрлек тә, интернационаллек тә, коллективлыҡ тойғоһо ла инә. Был төшөнсәләр үҙенән-үҙе бар буламы, әллә тәрбиәлелектәнме? Тәрбиә аша булһа, ғаиләнәнме, мәктәптәнме, тирә-яҡ мөхиттәнме, үҙтәрбиәнәнме? Башҡорт халҡы ғүмер-ғүмергә Уралын йән аямай һаҡлаған. Беҙҙең өсөн, балалары өсөн. Ә бөгөн беҙ ошоноң ҡәҙерен беләбеҙме? Атай-олатайҙар түккән ҡандың ни өсөн икәнлеген уйлап ҡарайбыҙмы? Әллә ҡайһы берҙәребеҙ Уралда кем йәшәһә лә йәшәһен, ә мин сит илдә йәшәйәсәкмен, тиғән маҡсат менән үҫеп киләме? Ошо хаҡта уйланыу, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү ғаиләнән дә, мәктәптән дә булырға тейеш. Һәр бала үҙ тарихын белеп, атай-олатайҙарҙың илһөйәрлек рухын тойоп үҫергә тейеш. Башҡорт халҡы балаһында сәңгелдәктән башлап илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләргә тырышҡан. Уның ил, илгә һөйөү, тәбиғәткә ҡарата мөхәббәт тураһында йырҙары, мәҡәлдәре иҫ китмәле күп. Мәҫәлән, "Үҙ илең - алтын, кеше иле - тоткон" тигән мәҡәл буйынса инша яҙҙырһағыҙ, уға аңлатма биреп китергә мөмкин. Ни өсөн кеше сит илдә тоткон? Ни өсөн кеше сит илдә рухи ҡол? Сөнки сит илдә үҙенсә, тәбиғәттән һалынған булмышына ярашлы йәшәй алмай: үҙенсә һөйләшә, йырлай, аралаша алмай, ҡанына тыумыштан һалынған сәләмәтлек сығанағы - милли аҙығы менән туҡланмай. Күңел йылыһы алырлыҡ туғандары менән аралашмай. Кемгәләр яраҡлашып, фәҡәт нимә хаҡыналыр хеҙмәт итеп йәшәргә генә мәжбүр. Үҙ булмышындан ситләшеп, кемдәргәләр яраҡлашып, ярамһаҡланып йәшәү - рухи ҡоллоҡ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ВАҠ-ТӨЙӘК БУЛҺА ЛА...



# ҺАУ БУЛ, СЫЛҒАУ!

**РФ оборона министры Шойгуның, сылғауҙарҙан баш тартырға кәрәк, тигән тәкдиме Рәсәй медиа-киңлектәрендә күп бәхәстәр, фекер алышыуҙар тыуҙырғайны. Интернет бер нисә көн дауамында "сылғау" хаҡында һыктаны, хатта ҡайһы бер блоггерҙар һәм журналистар уға һәйкәл ҡуйыу кәрәклеге тураһындағы тәкдимдәр менән сығыш яһаны. Ошо уңайҙан бер-нисә фекер:**

**Азамат САЛАУАТОВ, йәш хәбәрсе:** Хәрби бурысты үтәп ҡайтыуыма йыл самаһы ғына ваҡыт үтте, шуға күрә, Рәсәй армияһында барған үҙгәрештәргә үҙем шаһитмын, тип тә әйтә алам. Сылғауҙан яйлап баш тартыу ҙа армияла инде бер-нисә йыл бара. Мин хеҙмәт иткән хәрби частә лә, ҡайтыуыма ике аҙна самаһы ваҡыт ҡалғас, сылғау "запаска" китте. Командирҙар ҙа, һалдаттар ҙа был күренеште тыныс ҡабул итте. Ике быуаттан ашыу тарихы булыуға ҡарамаҫтан, сылғау баш тарта алмаҫлыҡ кейем түгел, ҡасан да булһа, һалдат гардеробынан китергә тейеш ине. Шойгу күп йылдар әкренләп тормошҡа ашырыла килгән үҙгәрешкә нөктә генә ҡуйҙы. Генералдар уның менән килеште, Дәүләт Думаһы хупланы... Ә шулай ҙа... Дәүләттә хәл ителеш көтөп ятҡан мәсьәләләр бихисап. Армияла ла улар етерлек. Бигерәк тә шуныһы ҡурҡыныс: бөгөнгө армия илһөйәрлек рухын нығытҡан, егеттәрҙән Ватан һаҡсылары тәрбиәләгән мәктәп түгел. Күп хәрби частәрҙә офицерҙар эскелеккә бушамай, битарафлыҡҡа батҡан. Бербер хәл була ҡалһа, был өйөрҙәң ярҭыһы ҡасасаҡ, ҡалған өлөшө берберeһен үлтереп бөтәсәк. Хәрби саҡырыуҙар гөрләп үтеүгә ҡарамаҫтан, хеҙмәткә саҡырылыусыларға "хәрби хеҙмәт" ни өсөн кәрәклеген аңлатҡан кеше юҡ. Аңлатыр ҡиммәттәр ҙа юҡ. Ә сәбәбе - илде туплар, халыҡты берләштерер, егеттәрҙән ил таяныс тәрбиәләр идеология булмауында. Ә сылғау - пустәк кенә...

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ, запастағы кесе сержант:** Юлһыҙ ерҙән иномарка йөрөй алмаған кеүек, америкалылар ойоҡбашы ла беҙҙең климат шарттарында йәшәп китә алмаясаҡ. Ә сылғау ваҡыт менән һыналған, тоғрологон иҫбатлаған әйбер ине. Эйе, эт сапҡанға бет саба, тиғән кеүек, бөгөнгө көндә бар нәмәлә лә Америкаға оҡшарға тырышыла. Ә ниңә барыһы ла американдарса булырға тейеш? Һуңғы йылдарҙа йылдам үҫешкән Ҡытай менән Япония әүҙем модернизация алып барыу менән бергә, үҙҙәренең боронғо йәшәү рәүешен һаҡлап ҡалырға тырыша. Ә беҙҙә модернизация һүҙе аҫтында, үткәндәрҙән бөтөнләйгә баш тартып, ят булған мәҙәниәтте, йәшәү рәүешен, сәйәсәтте үҙебеҙгә маяҡ итеп алыуҙы аңлайҙар. Был беҙҙең йолаларыбыҙҙы, тарихыбыҙҙы, булмышыбыҙҙы онотоуға килтерәсәк. Ни өсөн үҙебеҙҙең ҡиммәттәргә йәбешеп ятмаҫҡа? Һуҡыр рәүештә кемдеңдер ҡылыҡтарын ҡабатлау һыйырға эйәр һалған кеүек көлкө күренә. Сылғауҙан баш тартыуҙа ла ошо дөйөм насар күренештең бер өлөшөн, тамырҙарҙан алыҫлашырға тырышыуҙы күрәм.

**Талха ҒИНИӘТУЛЛИН, яҙыусы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны:** Урау өсөн күп кенә ваҡыт китһә лә, сылғауҙар ялан шарттарында бик уңайлы булды. Бер ягы һыулана ҡалһа, икенсе осон әйләндереп урар инек. Үҙебеҙ менән запас сылғау ҙа алып йөрөнөк. Сылғауҙар ике өлөштән торҙо. Өҫкө өлөшөн "обмотка " тип йөрөттөк. Уның оҙонлоғо бер-ике метр булғандыр, тубыҡҡа ҡәҙәр етә торғайны. Әйтеүҙәренсә, япондар ҙа уны ҡулланған. Һуңынан, аяҡ кейемлә ярашлы, сылғауҙар ҙа ҡыҫҡара төштө. Германияла немецтарҙың трофей итектәрен сылғаулап кейҙек. Сылғау һәр саҡ һалдаттың тоғро юлдашы булды. Бөгөнгө әрмене лә сылғауһыҙ күҙ алдына килтерә алмайым...

Эйе, хәҙер беҙҙең армия тулыһынса НАТО формаһына күсергә тора, тиҙҙәр, шуға ла сылғауҙы "запаска" ебәргәндәрҙер, яңы кейемгә ул килешеп етмәйҙер. Ботинкалар ҙа хәҙер баулы, ойоҡбаш менән кейеү уңайлыраҡ. Ләкин ойоҡбаштарҙың ниндәй материалдан эшләнәсәге лә мөһим бит әле. Нисек кенә булмаһын, беҙҙә хәҙер бер сиктән икенсе сиккә һуғылыу йышайҙы. Юдашкин формаһы менән килеп сыҡҡан хәл ҡабатланып ҡуймаһа ярай ҙа инде...

КЕНДЕГЕ БЕРЕККӘН...



# ...МАШИНАҺЫНА

**Ир-егеттең иң төп мауығыуҙарының тағы береһе - ул машина. Мин дә бала саҡтан үҙ машинам тураһында хыялландым, был хыялым 26 йәштәрҙә тормошҡа ашты.**

Әле бына шул кендегемә береккән ярҙамсым аҡса табырға, ғаиләмде аҫырарға ярҙам итә. Етенсе йыл таксист булып эшләйем. Ҡара иҫәп менән һанап сығарғанда, яҡынса миллион ярым километрҙан ашыу юл үткәнмен. Юл йөрөүсе таксист эше ситтән ҡараһаң ғына еңел һымаҡ, үҙең был өлкәгә башҡоллө инеп китһән, бөтөнләй һин уйлағанса булмауын аңлайһың. Яҡшы таксист автомобилен һәм юлдарҙы "биш бармағы" һымаҡ белеүҙән тыш, кешеләр менән дә еңел аралашырға, үҙ һүҙенә һәм ваҡыт төшөнсәһенә тоғро булырға тейеш. Ошо сифаттарың бар икән, һин дә тәүәккәлләп ҡарарға мөмкинһең.

Хеҙмәт юлыма байҡау яһағанда, тәүҙә ауылда ҡул һуғышы буйынса тренер, спорт мәктәбе директоры ла булып эшләнем, әммә финанс хәлемдең ҡөнәғәтләндермәүе арҡаһында был эште ҡалдырырға тура килде. Хәҙер үкенмәйем - машинам менән эшләгән аҡсам йәшәребеҙгә етеп тора.

Әле мин етенсе машинамда елдерәм. Элегерәк тотонолғандарҙы һатып ала инем, ни тиһәң дә, үҙең белгән кешенән һатып алып, бер-ике йыл йөрөтөп һатһаң, яңы автомобиль алып һатып ебәргәнгә ҡарағанда аҙыраҡ аҡса юғалтаһың бит - 20-30 мең самаһы ғына. Ә яңыһын шундай уҡ ваҡыттан һуң һатырға уйлаһаң, хаҡын кәм тигәндә 100 меңгә төшөрөп һатырға тура килә.

Әлеге көндә мин Рәсәйҙә сығарылған "Лада-Приора" машинаһында елдерәм, өр-яңынан һатып алынған өсөнсө машинам был. "Приора" үҙен юлда иркен тотоуы, көслө лә, ышаныслы ла, сағыштырмаса арзан булыуы менән дә ылыҡтырҙы. Бер генә "алама" ягы бар, минеңсә - двигателенең ҡайһышы өҙөлһә, клапандары бөгөлә лә ҡуя. Әммә, минә ҡалһа, был машина, сит ил автомобилдәре менән сағыштырғанда күпкә уңайлыраҡ. Ҡытай һәм Үзбәкстан "тимер ат"тары - "Лифан Солано" һәм "Део-Нексиа" автомобилдәре юлда йомшаҡ йөрөй, әммә авариялар ҙа үҙҙәренең "кағыҙ" автомобиль булыуын күрһәтә барыбер. Авария ваҡытында "Део-Нексиа" двигателе артҡы ултырғыстарғаса инеп китә икән, тиғән хәбәр ҙә йөрөй. Һуңғы 7 йыл менән сағыштырғанда, хәҙер юлдарҙағы машиналар һаны 4-5 тапҡырға артты. Ҡалалар эсендә лә, трассаларҙа ла һыйыш юҡ. Юл хәрәкәте бәрелештәре осраҡтарында һәләк булыусылар һаны арта барыуы ла хәүефләндерә. Шулай ҙа, килем сығанағым шул булғас, был эшемдән китергә йыйынмайым. Ни тиһәң дә, машинала йөрөү минең өсөн дә байлыҡ билдәһе түгел, ә йәшәү сығанағы бит.

**Финат ҠУЖӘХМӘТОВ.**
**Ейәнсура районы Иҫәнгол ауылы.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ШӘРЕҠТӘН - ҒӘРЕБКӘСӘ,

## йәғни Урал аша үткән ырыуҙар юлы



### Һуғыш юлы

Беҙҙең төбәктә Һуғыш юлы берәү генә, ә асаһы икәү. Төньяҡтар, Мулдаҡай, Туңғатар өсөн юл хәҙерге Ҡужай ауылы аша Уй һыуы башы, Уйташты һулда ҡалдырып, Әңкә тауы башы, Оҙонҡыр тауының көньяғы, Әй һыуы кисеүе, Ямаҙы тауы менән Өрәңге араһына керә. Ә көньяҡтар өсөн юл, хәҙерге Рысай (Аҡбулат) үҙәне менән Аҡкүлде һулда ҡалдырып, көнбайышҡа Аратау мороно менән Яманһаҙҙы төньяҡтан урап, Яйыҡ кисеүен кисә. Унан һуң Нәжем, Ялпантау аша төшөп, Әйҙең үрге кисеүенә төшә. Артабан ике юл да бергә ҡушылып, Өрәңге моронон, Нөгөштөң төньяғын урап, Шуйҙа һырты ашаһында оло һуғыш юлына ҡушылып, Өфөгә йүнәлгән. Өрәңге, Әүәләк - Ялауҙы араһы менән Нөгөш армытының биләне аша төшөп, Йүрүҙәнде кисеп, Егәлгә мороно менән дә ялан яҡҡа сыҡҡан юл булған. Бында инде ер-һыу, тауҙарҙы белгән башлыҡ дөрөҫ йүнәлеш алған. Егәлгәне артта ҡалдырғас, һулғараҡ тартҡаны Әмшәр һырты аша турыраҡ сыҡҡан. Уңғараҡ тартҡаны Аҡсар (Аҡсыра) армыты аша Оло һуғыш юлына төртөлгән. Тиләү-күбәләктәр Оло һуғыш юлына ҡайҙа ҡушылғандыр, әммә Эрәҫтәк тауының үҙәге тауҙар араһына кергән ере икәненә шик ҡалдырмай. Ул бөгөн дә юл. Күбәләк тиләүҙәр, бәлки, ҡатайҙар аша йөрөгәндер? Һәр һуғыш өсөн саҡырылыштың шарты билдәләнгән. Шулай ҙа уларҙың юлы Ирәмәлдең көньяғынан Бәкте армытындағы Таш ҡапҡаны үтмәйенсә, башҡа юлдары булдымы икән? Башҡаса юл юҡ. Сөнки Башы аҡ, карталарҙағы Машаҡ һәм Нары армыттары буйлап юл тик көньяҡҡа. Ә уларға көнбайышҡа барырға кәрәк. Ул саҡта хәритәләре булғанмы-юҡмы, әммә оло һыуҙы тик бер ерҙә генә кисеү отошло булғанға, Өфө тирәһенә улар Ҡариҙел Ағиҙелгә ҡушылғанғаса Иҙелде кискән булырға тейеш. Башҡаса Иҙелде кисмәй, уны унда ҡалдырып, юлдары дауамланғандыр. Нисек үттеләр икән Кинелде, Булығаны (Волганы)? Аптырарһың. Һалдар төҙөнөләрме? Тимер сыбыҡ канаттар ҙа юҡ. Ярым ҡырағай ярһыу аттарҙы нисек тейәнеләр? Йөҙөп сыҡтылармы? Ә арбалар? Әйбер-ҡара? Ҡорал? Мең һорау. Ҡыҫҡаһы, батыр, бик батыр булған олатайҙар.

Әле тасуир иткәндәрем - Рәсәйҙең оло һуғыштарына киткән яугирҙар юлы. Һуңғылары - тик беҙҙең төбәк һуғышсылары юлы. Әммә ул юл башҡа ваҡыттарҙа ла, нигеҙҙә, ҡышын, йылғалар, һаҙҙар туңғас, саналарҙа йөрөгән юл булған. Ул ваҡытта беҙҙең төбәктә бер ҡала ла булмаған. Олатайҙар Өфөгә, Һамар яҡҡа күн, ҡайыш, балауыҙ алып барған. Алып ҡайтҡандары, нигеҙҙә, үрнәк өсөн төрән, ҡуласа эшләү өсөн оҙон-оҙон шыма тимер, лом һәм эш ҡоралдары үрнәге булған.

### Ристан юлы

Ристан тигәс тә, ул кешеләрҙе зимагорҙар тип уйларға ярамай. Ристан халыҡ араһында арестант һүҙенең ҡыҫҡартылған әйтелеше. Арестанттар юлы халыҡ телендә Себер юлынан да ҡурҡынысыраҡ, күңелдәренә шом һалған бер исем булып, Беренсе Бөтә донъя һуғышына тиклем, дөрөҫөрәге, Октябрь революцияһына тиклем ҡулланылған.

Рәсәй империяһы көнсығыш башҡорт ҡәбиләләрен генә түгел, ҡаҙаҡтарҙың Урта һәм Бәләкәй Йөҙҙәрен үҙенә буйһондорғас һәм 1735 йылда Ырымбур ҡалаһын һала башлағас та Ристан юлы хасил була. Йылдар үтеү менән ҡала нығына, ҡәлғәгә әйләнә. Билдәле, һәр ҡаланың үҙ төрмәһе була. Ырымбур ҡалаһы төрмәһе, нигеҙҙә, баш бирмәгән, үҙ азатлығы, ере, һыуы, халҡы өсөн көрәшкән башҡорт яугирҙарын, илһөйәрҙәрен хөкөмһөҙ-судһыҙ язалау өсөн ҡулланылған. Көнсығыш башҡорт ҡәбиләләренең ихтилалдарҙы етәкләгән юлбашсылары ла Ырымбур төрмәһенең еүеш ҡаҙымәтеләрендә (казематтарында) ултырған, йә баштарын һалған. Зиндан ерҙе ҡаҙып, өҫтөн тимер рәшәткә йә йыуан ағас һайғауҙар менән ябып эшләнгән. Әгәр зиндан-соҡорҙо ябыу өсөн тимер, ағас юҡ икән, өҫтө асыҡ булған. Әгәр зиндан-соҡор ябыулы булһа, өҫкә яғынан ҡолдо, әсирҙе төшөрөр өсөн япмалы тишек эшләгәндәр. Әсирҙе төшөрөү өсөн йә арҡан, йә баҫҡыс ҡулланылып, уны өҫкә тартып алып ҡуйғандар. Аҙыҡ һәм һыу күнәк менән төшөрөлгән. Зиндандың тәрәнлеге кәм тигәндә дүрт метр һәм унан да артығыраҡ. Ундай зинданды мин 1982 йылдарҙа Дүшәмбе ҡалаһының музейында күрҙем. Зиндандың диаметры - 10-12 метр, тәрәнлеге - 5-6 метр. Төбөндә кеше һөйәктәре һәм бығаулы ҡолдар макеты ята. Каземат һүҙе лә урыҫтар тарафынан үҙ телдәренә яраҡлаштырып әйтелгән һүҙ булырға тейеш. Ҡаҙы, ер ҡаҙыу (кази), һүҙе төркисә булһа, мәте тигәне фарсы телендә - яҙыу. Йәки "үҙенә ер аҫтына яҙмыш яҙған" тигән мәғәнәгә эйәлер. Уны мәте ҡаҙы, ҡаҙылған мәте тип тә аңлап була. Сөнки төрки телендә мәте ул - глина. Ҡаҙылған глина соҡор була. Ысынлап та, ер өҫтө ҡара балсыҡтан һуң ташҡа тиклем күп ерҙә глинанан тора. Уны глина соҡоро, зиндан тип аңлау ҙа дөрөҫ булыр. "Казематта серетермен башыңды", тигән янауҙар көнитмештә булған бит. Кемдәр тарафынан һәм ниндәй телдә әйтелгәндәрен төҫмөрләү ауыр түгел.

Ур йылғаһының Яйыҡҡа ҡойған тамағында буласаҡ Ырымбур ҡалаһы төҙөлә башлаһа ла, был урын лайыҡлы тип табылмай. Буласаҡ Ырымбур 252 саҡырым көнбайышҡа күсерелеп, Яйыҡтың ярына ултыртыла. Ҡаҙаҡтар Рус дәүләтенә ҡушылһа ла, башҡорттарҙың ҡаҙаҡтар менән ҡушылып, бергәләп яу күтәреүҙәренән ҡурҡып, ике аралыҡҡа крепостар - диуарҙар һәм урталарына редуттар төҙөү ҡарала.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы. Башы 5-7-се һандарҙа).**

КЕНДЕГЕ БЕРЕККӘН...

# ...ҒАИЛӘҺЕНӘ, БАЛАЛАРЫНА

**Бәхетле ғүмер кисереү өсөн ир-егеткә үҙ яртыһын табып, кендеген ғаиләһенә беректереү мөһим. Был - тәбиғәт законы. Берәүҙәргә был бәхет йылмая, ә икенселәр иһә йә бөтөнләй үҙ яртыһын осратмай, йә быға оло әһәмиәт бирмәй, хистәрен тирә-йүнгә сәсеп, үҙен дә, янындағы яҡын кешеһенең дә ғүмерен үкенесле уҙғарырға мәжбүр итә.**

Шәхсән үҙемә килгәндә, күп тиҫтерҙәремдән айырмалы рәүештә, бик йәшләй матур ғаилә ҡороу, балалар үҫтереү, үҙ йортомдо булдырыу хыялы менән йәшәнем һәм, Аллаға шөкөр, был матур ниәттәрем тулыһынса тормошҡа ашты. Ғаиләм минең өсөн барыһы ла - тормошом, булмышым, бөгөнгөм һәм киләсәгем. Ә балаларҙы Хоҙайҙың миңә биргән иң оло бүләге, тип ҡабул итәм һәм был бәхет өсөн рәхмәттәр уҡыйым. Хәҙер инде ейәндәр һөйөү бәхете кисереп, икеләтә шатлыҡ кисерәм. Ғөмүмән, ғаиләмдән башҡа мин был донъяла йәшәүҙең мәғәнәһен дә, ҡыҙығын да күрмәйем. Ауыр эш аҙнаһынан һуң балалар менән бергә ҙур табын янына йыйылып, донъя хәлдәре тураһында гәпләшеп, фекер алышып, башҡарасаҡ эштәрҙе барлап алыу көс бирә, дәрт өҫтәй, тормошомдо йәмләй.

Әйтергә кәрәк, бөгөнгө етеш һәм матур тормош беҙгә еңел бирелмәне. Йәш саҡта аҡсаһыҙ ултырған ваҡыттар йыш булды, үҙ йортобоҙҙо булдырғансы, кеше тупһаһында ғүмер итеүҙәр үҙәккә үтте. Ләкин берберебеҙгә булған хөрмәт, һәр мәсьәләне уртаға һалып һөйләшеп, хәл итергә тырышыу кеүек сифаттар ғаилә усағыбыҙҙы һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирҙе. Шулай уҡ ҡатынымдың бер ҡасан да минең кешелек һәм ирлек дәрәжәмде кәмһетмәүе, балаларға һәр саҡ абруйлы һәм хөрмәтле атай итеп күрһәтеүе лә ғаиләбеҙҙе бәхетле итеүҙә ҙур роль уйнаны. Ир менән ҡатындың өйләнешеүе генә уларҙың бер бөтөн булып китеүен аңлатмай, бының өсөн оло тырышлыҡ һалырға кәрәк. Һәм, күп осраҡта, был ҡатын-ҡыҙ иңенә төшкән өлөш. Гүзәл заттың аҡыллығы һәм түҙемлеге ғаиләне бер бөтөн итеүҙә һәм ирҙең ғаиләгә берегеүендә ҙур роль уйнай. Шуға күрә, хөрмәтле ир-егеттәр, кәләшлеккә ҡыҙ һайлағанда бер минутлыҡ хистәр тойғоһона бирелеп эш итмәгеҙ, ғүмерлеккә йәр һәм иптәш булырлыҡ һылыуҙарҙы эҙләгеҙ.

**Фәнис АБДУЛЛИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Тупаҡайҙар ҡиммәтле тиреле йәнлектәргә, бигерәк тә тейенгә, һунар итеү өсөн ҡулланыла. Ҙур йәнлектәр өсөн уҡтар, лавр япрағы (лавролистная) һәм ромб формаһындағы тимер һөңгөләр файҙаланылған. Осло һөйәктән яһалған уҡтар ҙа булған. Башҡорттарҙың хәрби әҙернәһе һунар өсөн ҡулланылған йәйәнән бер аҙ айырылып торған. Ул һәр ваҡыт ике төрлө ағастан яһалған пластиналарҙы йәбештереп эшләнгән, эске яҡтан, ныҡлыҡ өсөн, буйынан-буйына мөгөҙ пластина, ә тыштан, дым тартмаһын өсөн, туҙ йәбештерелә. Әҙернәнең оҙонлоғо бер метр була, ул ныҡ итеп бөгөлә, остары ҡайтарылып ҡуйыла, бик һығылмалы. Кереше нигеҙҙә ебәктән эшләнә. Әҙернә күн һаҙаҡта һаҡлана һәм походтарға ла биҙәге баҫып төшөрөлгән (соҡоп, ҡалҡытып) йәки сүкеп эшләнгән көмөш биҙәкле тимер ҡашлы һаҙаҡта йөрөтөлә **(һүрәт)**.



Башҡорттарҙың хәрби уҡтары һунар уҡтарынан уҡ башаҡтарының формаһы менән айырылып торған. Һәр һаҙаҡҡа 16-25 дана уҡ һыйған.

Формалары буйынса уҡ-һаҙаҡтар дөйөм азиат тибында була: күн менән тышланған ағас каркаслы. Күн йәки буҫтау ептәр ярҙамында ул бер нисә бүлеккә бүленә. Уҡтар һәр ваҡыт уҡ-һаҙаҡҡа осло башы менән аҫҡа ҡаратып һалына. Һаҙаҡ кеүек үк, уҡ-һаҙаҡтар бик йыш көмөш биҙәк менән ҡапланған тимер пластиналар йәки ҡаштар менән биҙәлә.

Башҡорттарҙың ҡоралдары хаҡында һүҙ барғас, һөңгө, киҫтән һәм һайман (кольчуга) тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк.

Тимер һөңгөләр оҙон һапҡа ултыртылған. Хәрби ҡорал сифатында үҙенсәлекле киҫтән - оҙон һапҡа ҡыҫҡа сынйыр ярҙамында нығытылған тимер шар - ҡулланылған. Шундай киҫтәндәрҙе миңә күп тапҡырҙар башҡорттарҙа "кәрәк булыуы ихтимал" тип төнөн юлға сыҡҡанда, "кәрәге тейер" тип өйҙә тотҡандарын күргәнем булды.

Башҡорттарҙа һаҡланыу ҡоралы булып тимер күлдәктәр - һайман - һәм ҡуяҡтар (буҫтауға ҡойолған тимер пластиналар нығытылған кейем) торған.

Борон башҡорттарҙың ҡоралы саҡматашлы булһа, XIX быуаттың икенсе яртыһынан алып уларҙы пистонлы ҡоралдар алмаштыра, берданкалар ҙа күренә башлай. Ҡорал кәрәк-ярағы ла үҙенсәлеге менән айырылып торған. Ҡулбаш аша кейелгән ҡайышта һунарсының һәр саҡ кәзә йәки һыйыр мөгөҙөнән эшләнгән ҡотоҡсаһы (дары һауыты), күн тоҡсай йәки мөгөҙҙән яһалған дроб һауыты, мөгөҙҙән эшләнгән йәки күндән тегелгән фистон һауыты, һөйәктән яһалған дары һәм дроб үлсәгесе, йәҙрә өсөн айырым күн һауыт йәки туҡыманан тегелгән патронды, зарядты тығыҙлағысы йөрөгән.

**Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы директоры, социология фәндәре кандидаты Таһирйән Мөхәммәт улы ҒӘНИЕВты, юлында ниндәй генә ҡаршылыҡтар осрауға ҡарамаҫтан, һәр ваҡыт алдына алғанын ҡуймай, маҡсатына барып етә торған ныҡышмал кеше, алдынғы ҡарашлы етәксе итеп беләләр. Уның менән аралашҡанда тағы ла бер сифатына иғтибар итмәй ҡалмайһың: ул да булһа, һәр бер мәсьәләнең, проблеманың асылын шундуҡ, автоматик рәүештә тиерлек дөрөҫ билдәләп, хәҡиҡәткә тура ҡарай белеүе. Был - фәҡәт алдынғы ҡарашлы, заман менән бергә атлаусы етәкселәргә хас сифат. Таһирйән Ғәниев был колледжға тиклем 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында физика уҡытыусыһы, директор урынбаҫары, Республика башҡорт-төрөк лицейында директор булып эшләй. Ә шулай ҙа Таһирйән Мөхәммәт улының алдынғы ҡарашлы етәксе, уңышлы кеше булып китеүенең нигеҙҙәре үҙе тыуып үҫкән ғаиләлә һалынған. Шуға ла уның үҙ әңгәмәһен тап бала саҡ хәтирәләренән башлап китеүе лә осраҡлы түгел.**

### Өфөгә күсеү маҡсатыбыҙ

Беҙ тыуымышыбыҙ менән Салауат районының Күҫәләр ауылынан. Ғаиләлә биш малай үҫтек. Минең беренсе уҡытыусым әсәйем булды. Атайым күп йылдар мәктәп директоры булып эшләне. Улар беҙгә ҙур маҡсаттар ҡуйып йәшәргә өйрәтте. Иң мөһиме: атай-әсәйебеҙ беҙҙә туктауһыҙ алға барыу, юғарыраҡ күтәрелеү ынтылышы тәрбиәләне. Әгәр ҙә улар беҙҙә ошондай сифаттар тәрбиәләмәһә, мәҫәлән, Әкрәм ағайым менән мин әлеге уңыштарыбыҙға өлгәшә лә алмаҫ инек. Атайыбыҙ үҙе лә башта ябай уҡытыусы

Ул шиғырҙар яҙа, әллә күпме туғандарыбыҙҙың ғаилә тарихын яҙҙы, шәжәрәләрен төҙөнө. Беҙ уның бер нисә китабын да сығарҙыҡ. Бала саҡта әсәйебеҙ беҙгә командир булды, беҙҙе даими контролдә тотто, кәңәштәр бирҙе, йомош ҡушты, уның ҡараусы, бөгөн беҙ уның үҙен ҡарайбыҙ.

Салауат районының Мәсетле ауылында йәшәгәндә өйөбөҙҙә башҡа төрлө йыһаз һатып алырға аҡсабыҙ булмаһа ла, пианинобыҙ булды. Атайыбыҙ менән әсәйебеҙ беҙҙең киләсәгебеҙ яҡты һәм яҡшы булһын өсөн тырышты. Пианино ауыл ере өсөн ят күренеш, тимәк, улар был музыка ҡоралын һатып алған

өсөн тота, ә беҙҙең иң ҙур байлығыбыҙ, әйткәнемсә, пианино булды.

### Шәхси өлгө

Педагогика алымдары йыл һайын үҙгәреп, инновациялар менән яңыртылып тора. Минеңсә, педагогиканың һәр заманға ла ҡулай булырлыҡ классик формаһы - ул шәхси өлгө. Тәрбиәсе матур итеп һөйләп, үҙе һөйләгәненең киреһен атҡарып йәшәһә, тәрбиә ошо урында тамамлана. Мин ниндәй мәктәптә эшләһәм дә, үҙемдең балаларымды һәр ваҡыт, көслөрәк башҡа мәктәптәр булһа ла, үҙемдең артымдан эйәртеп йөрөргә тырыштым. Мин уҡытыу-

Бөгөн улар яҡшы кимәлдә инглиз телен беләләр. Әле өлкән улым Булат "Востокнефтезаводмонтаж"да эшләй, сит илдәргә командировкаларға йөрөй. Ирешат улым Өфө инженер селтәрендә, ҡыҙыбыҙ Гөлназ "Башкирэнерготранс"та хеҙмәт итә. Кинйәбеҙ Азамат быйыл Өфө дәүләт авиация техник университетын тамамлай. Балаларыбыҙ беҙгә ҡарағанда компьютерҙы яҡшыраҡ белә. Мин, мәҫәлән, компьютерҙы файҙалана ғына беләм, улар унда йөҙөп йөрөй, мин инглиз телен әҙ-мәҙ генә беләм, улар донъя менән был телдә иркен аралаша. Сөнки замандың талабы шундай. Балаларыбыҙ кешеләр менән дә иконсе төрлөрәк аралаша. Беҙ сабырыраҡбыҙ, ихтирамлыраҡбыҙ, улар агрессивыраҡ, әүҙемерәк, "юҡ" тип өҙөп әйтә белә. Беҙ кешене үпкәләтеүҙән ҡурҡабыҙ, ә уларға хәҙер генә ыңғай һөҙөмтә кәрәк.

### "Балалар ғына ҡамасаулай"...

Беҙҙең коллективтың иң төп маҡсаты - балаларға бирелгән белемдең сифаты. Һуңғы йылдарҙа төрлө мәғариф реформалары юҫығында сифат иконсе

һүҙ йөрөй, йәнәһе: "Мәктәптә, колледжда эшләргә була, әммә унда балалар ғына ҡамасаулай..." Ә бит, ысынында, балалар насар булмай, үҙебеҙ насар эшләйбеҙ түгелме? Беҙ, һуҙынан әрләһәң, һуң була, тип ҡайһы ваҡыт балаларҙы бер сәбәпһеҙгә тоҡтомалдан әрләргә лә яратабыҙ.

Элегерәк уҡытыусылар үҙҙәренең уҡыусыларынан күпкә белемлерәк була торғайны, хәҙерге ваҡытта уҡыусыһының уҡытыусыһынан күп йәһәттән алға китеүенә лә тыныс ҡарарға кәрәк. Алда әйткәнемсә, хәҙерге йәштәр беҙҙән заман техникаһын үҙләштереүҙә, сит телдәрҙе белеүҙә күпкә алға китте. Әммә беҙ ҙә төшөп ҡалғандарҙан түгел, беҙҙә ике төрлө ижтимағи ҡоролошто кисереп йыйған тәжрибә бар. Уҡытыуҙың хәҙер маҡсаты ла үҙгәрҙе. Элек төп маҡсат белем биреү булһа, хәҙер инде баланы белем алырға өйрәтеү, маҡсатлы кеше итеп тәрбиәләү мөһим. Уҡыусы уҡытыусыһын бөтә яҡтан да үтеп киткән осраҡта ғына уҡытыу-тәрбиә эшенең дөрөҫ ҡуйылыуы хаҡында һүҙ алып барырға була.

Беҙҙең ятаҡта тәртип яҡшы, сөнки унда лидерҙар бар һәм тәртипте улар урынлаштыра.

# ХОЛҠОБОҘҘАҒЫ ҠӘТҒИЛЕК,

## хисле, ярҙамсыл булыуыбыҙ -

булып эшләне, артабан директор булып китте, аҙаҡ беҙгә баш ҡалала юғары белем алыу шарттары тыуҙырыу маҡсатында, аҡса йыйып, Өфөлә кооператив фатир һатып алдылар. Тимәк, улар шул саҡта уҡ Өфөлә йәшәүҙең һәм белем алыуҙың әһәмиәтен аңлаған. Күреүегеҙсә, беҙҙең ғаилә һәр саҡ үҫеш баҫҡысы буйлап өҫкә үрләгән. Атайым менән әсәйем икеһе лә педагог булғас, уларҙың кешеләргә мөнәсәбәте лә йылы, яҡты булды. Был етәксе булған кешегә иң кәрәкле һыҙат, сөнки коллективта йылы, яҡты мөхит булһа, һәр кем эшкә теләп, ашҡынып килә. Шуға ла мин үҙем ҡайһы ғаиләләге шундай мөнәсәбәтте һәр саҡ коллективымда ла урынлаштырырға ынтылдым.

Атайыбыҙ Бөйөк Ватан һуғышында Японияның Квантун армияһына ҡаршы торған фронт һыҙығында хеҙмәт итә. Әммә ул: "Мин бер кешегә лә атманым, үлтермәнем, атаҡаға йөрөмәнем. Шуға күрә мин үҙемде һуғышта ҡатнашҡан кеше тип иҫәпләмәйем. Ә бына утты-һыуҙы кискән егеттәр, ысынлап та, фронтта ҡатнашыусылар", - тип үҙенең Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыуын танымаңы, миҙалдар һәм льготалар юллап йөрөмәне. Әммә мин уның "бер кешегә лә атманым, үлтермәнем" тигән һүҙҙәрендә ысын мәғәнәһендәге педагог булыуын танып йым. Беҙҙең холҡобоҙҙағы ҡәтғилек, талапсанлыҡ атайыбыҙҙан килһә, әсәйебеҙҙән хисле, тойғоло булыу халәтен алғанбыҙҙыр. Әгәр ҙә ваҡытында мөмкинлектәр, шарттар булһа, әсәйебеҙ ижади пландағы ҙур кеше булып китер ине, тибеҙ.



планға ҡала бара. Белемдең сифаты юғары булһын өсөн белемле, тәжрибәле уҡытыусы кәрәк. Иконсенән, белем сифаты өсөн заманса шарттар, лабораториялар, полигондар булыуы мөһим. Беҙҙә әле хатта сәнәғәттә булмаған алдынғы ҡорамалдар бар. Һуңғы йылдарҙа, мәҫәлән, егермегә яҡын яңы лабораториялар төҙөнөк. Бынан тыш, студенттың ятаҡта йәшәү шарттары яҡшы булырға тейеш.

Ғөмүмән, мәктәптә тәртипте директор, уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр генә урынлаштыра алмай. Әйтәйек, беҙҙең ятаҡта төндә 300-350 бала йоҡлай. Өлкәндәрҙән бер вахтер ғына бар. Сөнки оптималләштереү һөҙөмтәһендә тәрбиәсе штаттары ҡалманы. Ғөмүмән, ниндәй генә коллектив булмаһын, һәр ваҡыт киҫкен проблемаларҙы лидерҙар ярҙамында хәл итергә тырышырға кәрәк.

### Йәштәргә талаптар

Заман хәҙерге йәштәрҙән мобиль булыуҙы, йәһәт ҡыймылдауҙы талап итә. Был нимәне аңлата? Беренсенән, интернет аша төрлө телдәрҙәге кәрәкле мәғлүмәтте эҙләп табыу, иконсенән, физик яҡтан мобиль булыу. Быға физик әҙерлек, һау-сәләмәт булыу талап ителә. Беҙ колледжда автомәктәп астыҡ һәм беҙҙең балалар аттестат менән бергә водитель танытмаһы алып сыға. Бының менән улар артабан юғары уҡыу йортонда белем алыуға күберәк ваҡыт биреүгә өлгәшә ала. Танытмаһы кеҫәһендә булғас, машинаһы булғас, руль артына ла ултыра. Хәҙерге ваҡытта автомобиль мобиль булыуҙың иң һөҙөмтәле сараһы. Өсөнсөнән, беҙҙең балалар үҙҙәренең хоҡуҡтарын, Конституцияны, закондарҙы белергә тейеш. Юридик грамотлылыҡ хәҙерге ваҡытта ҙур еңеүҙе аңлата. Был талаптар барлыҡ балаларға ла ҡағыла, шуның өсөтәүенә беҙҙең балалар үҙенең туған телен, халҡының тарихын белергә, мә-

> ***Заман хәҙерге йәштәрҙән мобиль булыуҙы, йәһәт ҡыймылдауҙы талап итә. Был нимәне аңлата? Беренсенән, интернет аша төрлө телдәрҙәге кәрәкле мәғлүмәтте эҙләп табыу, иконсенән, физик яҡтан мобиль булыу. Быға физик әҙерлек, һау-сәләмәт булыу талап ителә. Беҙ колледжда автомәктәп астыҡ һәм беҙҙең балалар аттестат менән бергә водитель танытмаһы алып сыға. Өсөнсөнән, беҙҙең балалар үҙҙәренең хоҡуҡтарын, Конституцияны, закондарҙы белергә тейеш. Юридик грамотлылыҡ хәҙерге ваҡытта ҙур еңеүҙе аңлата. Был талаптар барлыҡ балаларға ла ҡағыла, шуның өсөтәүенә беҙҙең балалар үҙенең туған телен, халҡының тарихын белергә, мәҙәниәтен, сәнғәтен ҡабул итергә тейеш.***

саҡта уҡ ҡалаға күсеп барыуыбыҙҙы күҙаллаған. Бәхетле үткән бала сағыбыҙҙы иҫкә төшөргәндә, мине иркәләргә һәм минән иркәләнергә яратҡан бесәй күҙ алдына килә. Ул мин илағанда яныма йүгереп килеп һыпланып, көйһөҙлөгөмдө оноттора белә торғайны. Өфөгә күсеп киткәндә мине өсөн иң ҙур фажиғә шул бесәйҙе ҡалдырып китеү булды. Ауылда барлыҡ малайҙарҙың да эте бар ине, беҙҙеке генә булманы. Әте бит кеше байлығын һаҡлар

сылар, директорҙар алдында сығыш яһағанда һәр ваҡыт: "Һәр уҡыу йортонон ниндәй кимәлдә эшләүенең бер күрһәткесе була: әгәр ҙә һеҙҙең балағыҙ үҙегеҙ эшләгән мәктәптә уҡый икән, тимәк, һеҙҙең мәктәп алдынғы. Әгәр ҙә һеҙ үҙ балағыҙҙы башҡа мәктәпкә бирәһегеҙ икән, һеҙ үҙ көсөгөҙгә ышанмайһығыҙ һәм мәктәбегеҙҙә эштәр шәптән түгел", - тием. Мин дүрт баламды ла һәр ваҡыт үҙем эшләгән мәктәптә уҡыттым һәм балаларым да быға риза булды.

Былтыр беҙ 250 бала йәшәгән 2-се һанлы ятағыбыҙҙы ишектәҙрәләренән башлап алмаштырып, һәр бүлмәгә интернет ҡуйып, рәткә килтерҙек. Беҙ, балалар тиҙ генә был ҡорамалдарҙы емерел бөтөрөр, тип ҡурҡҡайныҡ. Ҡараһаҡ, балалар насар, тип яңылышҡанбыҙ, яҡшы шарттар тыуҙырһаң, балалар яҡшы икән. Әле бына йыл ярым ваҡыт үтте, беҙ төҙөгән бер генә йыһаз да емерелмәне. Балалар насар була, тигәндән, уҡытыусылар араһында шундай мәрәкә

# ТАЛАПСАНЛЫҠ – АТАЙЫБЫҘҘАН, әсәйебеҙҙән…

ҙәниәтен, сәнғәтен ҡабул итергә тейеш, тибеҙ. Был талаптарҙы мин башҡорт-төрөк лицейында директор булып эшләгәндә ҡуйғайным, хәҙер шул уҡ эштәрҙе яғыулыҡ-энергетика колледжында ла дауам итәбеҙ.

Былтыр беҙ уҡыу йортобоҙҙо тамамлаусыларҙың 90 процентын эшкә урынлаштырыуға өлгәшә алдыҡ. Быйылдан башлап, элеккесә, йүнәлтмә принцибы буйынса эшләй башлаясаҡбыҙ. Был уҡыу сифатын күтәреүҙә етди стимул булып тора, яҡшы уҡыуға конкуренция көсәйҙе. Бында принцип шундай: кем яҡшы уҡый, шул күберәк эш хаҡы түләнгән яҡшыраҡ эшкә урынлашыу хоҡуғына эйә.

Элек колхозда, совхозда, завод-фабрика цехтарында эшләгән кеше артыҡ күп уҡымаһа ла, тормошта үҙенең урынын таба ала ине. Кеше ул саҡта эш хаҡы ла ала, уға фатирын да, башҡаһын да бирәләр ине. Хәҙер инде йәмғиәттең кешегә ҡарата булған талабы ныҡ үҙгәрҙе. Дөрөҫөн әйткәндә, хәҙер юғары белеме булған кешегә лә эш табыуы еңелдән түгел. Шул уҡ ваҡытта хәҙер ғаилә ҡороуы ла, балалар үҫтереүе лә ауырыраҡ. Идеология булмағас, мәктәптә кемгә ҡарап, нисек йәшәргә, тигән һорау ҙа ҡуйып булмай. Бигерәк тә ауыл ерендә үҙҙәренең эш урыны булмаған ата-әсәләр балаларының киләсәген ниндәй юҫыҡта ҡорорға белмәй. Элек эш булһа ла, эш хаҡы, мөмкинлектәр аҙыраҡ булғандыр, шулай ҙа тырыш кеше юғалып ҡалмағандыр. Хәҙер инде тырыш кеше лә юғалып ҡалыуы ихтимал.

## Сит тел белеүҙең әһәмиәте

Сит тел белеү кешенең аң офоҡтарын киңәйтә. Сөнки хәҙер Советтар Союзы ваҡытындағы кәртәләр юҡҡа сыҡты һәм кешегә донъяның дүрт тарафына ла юлдар асылды. Бөгөн һәр мәктәп, һәр колледж, һәр юғары уҡыу йорто айырым төркөмдәр булдырып, һәр төрлө һөнәр буйынса сит телдәр белгестәре әҙерләргә тейеш. Ул нефтсеме, химикмы, тарихсымы, башҡорт теле уҡытыусыһымы, ниндәйҙер сит ил телен белгән белгес булһа, уның киләсәге яҡшы буласаҡ. Үҙемдең тәжрибәмдән сығып ҡына әйтәм: мин етәкләгән башҡорт-төрөк лицейын, хәҙер иһә ул Республика башҡорт лицейы тип атала, тамамлаған уҡыусыларым хәҙерге ваҡытта сит илдәрҙә, үҙебеҙҙә төрлө тармаҡтарҙа уңышлы эшләй. Уҡыусыларымдың ҡайһы берҙәренең эш хаҡтары минекенән күпкә юғары һәм улар быға фәҡәт сит телде яҡшы белеүе һәм быны үҙ хеҙмәтендә файҙаланыуы менән өлгәшә. Хәҙерге ваҡытта Рәсәйҙең нефть һәм газ сәнәғәтендә күп кенә сит ил фирмалары исәпләнә. Уларҙың технологияһы беҙҙекенә ҡарағанда алдынғыраҡ, һөҙөмтәлерәк, ҡеүәтлерәк. Беҙҙең башҡорт-төрөк лицейын тамамлаған уҡыусыларҙың күбеһе шул фирмаларҙа эшләп йөрөй. Бер француз фирмаһы яҡынса биш кешене эшкә алырға конкурс иғлан иткәйне. Шул конкурстың өс урынын беҙҙең уҡыусылар яуланы. Улар инглиз телен яҡшы белеүе менән башҡаларҙан бер башҡа юғары торҙо. Ул саҡта беҙҙең республикала эшләүсе төрөктәргә төрлөсә ҡараш булды. Әммә улар беҙгә сит телде өйрәнеү методикаһын индерҙе. Уларҙың методикаһы бар Рәсәйҙекенән ныҡ айырыла. Улар, беҙҙең кеүек, грамматиканы күп өйрәнмәй, күберәк сит телдә аралашып, ошо рәүешле һөйләшергә өйрәнә. Уларҙың методикаһы буйынса сит телдә аралашыу дәрестән һуң өйҙә, ятаҡта ла дауам итә. Тәүге осорҙа кем күпме һәм нисек белә, һүҙҙәрҙе яңылыш әйтһә лә, һөйләшергә тырышырға тейеш. Ошо рәүешле улар сит телдә һөйләшеүҙән оялыу комплексын юҡҡа сығара. Ысынында беҙ һүҙҙәрҙе яңылыш әйтеүҙән оялып һөйләшмәйбеҙ һәм шул арҡала үҫешмәйбеҙ икән. Төрөктәр беҙҙә үҙҙәренең аҡсаһына сит телгә өйрәнеү курстары, түңәрәктәре асты һәм, әйтергә кәрәк, шуның һөҙөмтәһендә Өфөлә һәм Башҡортостанда инглиз телен өйрәнеү яҡшырҙы.

## Оптималләштереү

Хәҙерге ваҡытта илебеҙҙә төрлө өлкәләрҙә оптималләштереү механик рәүештә генә бара. Ул күберәк һумдар, квадрат метрҙар, киловаттар нигеҙендә, йәғни һандар нигеҙендә генә алып барыла. Ҡайҙалыр ултырыусы аҡыллы ағайҙар шул һандарға ҡарайҙар ҙа, был дөрөҫ түгел, был былай йә тегеләй булырға тейеш, тип беҙҙең йәшәйешкә төҙәтмә индерергә тотоналар. Ә бына йәмғиәттең, коллективтың, милләттең, граждандарҙың теләген иҫәпкә алыусы һирәк. Башҡортостанда оптималләштереү үткәргәндә - башҡорттарға, Татарстанда үткәргәндә -татарҙарға ҡараш айырым булырға тейеш. Ни өсөн тигәндә, уларға бындай ҡараш икенсе урында айырым була алмай. Әйтәйек, балаларҙың һаны аҙ булған бер ауылға мәктәп кәрәкмәй, ябайыҡ, балаларҙы күрше ауылға автобус менән ташыйыҡ, ти башлайҙар. Ә ниңә бында, әйтәйек, шундай һорауҙар ҡуйылмай: был ниндәй ауыл, уның тарихы ниндәй? Был ауылдан ниндәй күренекле кешеләр сыҡҡан? Ауыл һәм уның кешеләре ошо төбәктең, илдең үҫешенә ниндәй өлөш индергән? Был ауылдың киләсәге бармы? Ә ниңә күп шәхестәр биргән йөҙәр-меңәр йыл тарихы булған ауылды һаҡлап ҡалыу буйынса ниндәйҙер программа ҡабул итеү урынына, әлеге замандың ваҡытлыса финанс көрсөгенә һылтанып, уны юҡҡа сығарырға тейешбеҙ әле? Быға беҙҙең хоҡуғыбыҙ юҡ! Мин бына бындай ҡарарҙар, программалар ҡабул ителеүе хаҡында ишеткәнем юҡ. Башҡортостандағы башҡорт мәктәбендә балалар һаны әҙерәк булһа ла, уны һаҡларға тырышырға кәрәк, тигән уй ағайҙарҙың башында ниңә тыумай икән? Был бик нескә проблема һәм башҡорттоң төп ватанында бындай проблемаларҙы һан нигеҙендә генә хәл итеү, минеңсә, дөрөҫ түгел.

> ***Ә ниңә бында, әйтәйек, шундай һорауҙар ҡуйылмай: был ниндәй ауыл, уның тарихы ниндәй? Был ауылдан ниндәй күренекле кешеләр сыҡҡан? Ауыл һәм уның кешеләре ошо төбәктең, илдең үҫешенә ниндәй өлөш индергән? Был ауылдың киләсәге бармы? Ә ниңә күп шәхестәр биргән йөҙәр-меңәр йыл тарихы булған ауылды һаҡлап ҡалыу буйынса ниндәйҙер программа ҡабул итеү урынына, әлеге замандың ваҡытлыса финанс көрсөгенә һылтанып, уны юҡҡа сығарырға тейешбеҙ әле? Быға беҙҙең хоҡуғыбыҙ юҡ! Мин бына бындай ҡарарҙар, программалар ҡабул ителеүе хаҡында ишеткәнем юҡ. Башҡортостандағы башҡорт мәктәбендә балалар һаны әҙерәк булһа ла, уны һаҡларға тырышырға кәрәк, тигән уй ағайҙарҙың башында ниңә тыумай икән?***

Башҡорт телен уҡытыу өлкәһендә лә проблемалар етерлек. Бында уҡытыуҙың сифатын күтәреү йәһәтенән белдерелгән дәғүәләр менән килешергә була, әммә бында уҡытыуҙың сифатын күтәреү, методикаһын үҫтереү урынына дәрестәрҙең һанын ҡыҫҡартыу, йәғни һыҙып ташлау менән генә булалар. Ата-әсәләрҙең теләге нигеҙендә генә предметты программанан һыҙып ташлау ҙа дөрөҫ түгел. Бында, бәлки, мәсьәләне Башҡортостанда йәшәгән бала, Башҡортостанда йәшәгән ата-әсә, тип ҡуйғанда бөтөнләй икенсе йүнәлеш алыныр ине.

## Мәғлүмәттең әһәмиәте

Кандидатлыҡ диссертациям "Мәғариф менән идара итеүҙе информатизациялау" тип аталды. Унда күберәк статистик мәғлүмәттәр килтерҙем. Хәҙерге заманда мәғлүмәткә эйә булыуҙың әһәмиәте нимәгә ҡайтып ҡала һуң? Мәғлүмәткә эйә булмағандың киләсәге бик шикле. Мәғлүмәт ул етәксенең, хеҙмәткәрҙең, ғөмүмән, кешенең эшмәкәрлек итеү ысулы, ҡоралы, ҡулланмаһы. Мәғлүмәт иң беренсе нәүбәттә теге йәки был мәсьәләлә проблемаларҙы күреп, аныҡлап, анализлап, шул проблемаларҙы хәл итеү юлында маҡсат билдәләү өсөн талап ителә. Шуға күрә хәҙерге ваҡытта иң перспектив һөнәрҙәрҙең береһе компьютер технологиялары, мәғлүмәт хәүефһеҙлеге өлкәһенә бәйле. Донъяның Сирия, Ливия тигән дәүләттәрендә килеп тыуған һәм барған сәйәси ваҡиғаларҙы ойоштороусылар интернет аша мәғлүмәт технологияларын файҙаланыуы хәҙер бер кемгә лә сер түгел. Әгәр ҙә компьютер, интернет булмаһа, был һуғыштар ҙа килеп сыҡмаҫ ине. Ғәрәп илдәрендә барған был сыуалыштарҙың дөрөҫ булыуы-булмауы хаҡында бер нәмә лә әйтә алмайбыҙ. Быларға иң дөрөҫ һығымтаны ваҡыт яһаясаҡ. Был миҫалдар мәғлүмәттең ниндәй көскә ҡорал булыуы хаҡында һөйләй.

Интернет аша йәш кешегә килгән мәғлүмәттең емерткес көсө лә сикһеҙ. Беҙ, педагогтар, йәштәрҙе был йәһәттән яҡшы менән яманды айыра белергә өйрәтергә бурыслы. Мәғлүмәт технологияларының, компьютерҙың яңы һәм заманға ярашлы булыуы ла мөһим бөгөн. Әгәр ҙә компьютер иҫке, интернетка сығыу тиҙлеге яй булһа, был шулай уҡ дөрөҫ түгел. Кисәге көндөң технологияһы ҙур файҙа килтерере лә икеле. Шуға күрә беҙ йыл һайын аҡса йәлләмәйенсә компьютерҙарыбыҙҙы яңыртабыҙ, ремонтлайбыҙ. Әгәр ҙә был эште бер йылға ғына кисектерһәң, шундуҡ артта тороп ҡалаһың, шундуҡ балаларға белем биреү престижы, методикаһы иҫкерә лә ҡуя. Әлбиттә, беҙҙә уҡыусы Өфө балаларының өйҙәрендә заманса техника бар, әммә беҙҙә ауылдан килеүсе балалар ҙа күп уҡый. Икенсенән, әгәр ҙә ҡала балаһының өйөндәге техникаһынан колледждағы техника ҡайтышыраҡ, хөртөрәк булһа, был хәл шундуҡ ул баланың уҡыуға мөнәсәбәтендә сағылыш табасаҡ. Теләйбеҙме-юҡмы, компьютерҙың роле көндән-көн артасаҡ, шуға күрә беҙ бында мәсьәләгә ыңғай ҡарарға тейешбеҙ. Әгәр ҙә беҙ заманса техникабыҙҙы яңыртырға, ремонтларға аҡса йәлләһәк, бөгөндән үҙебеҙҙең эш урыныбыҙҙан китергә тейешбеҙ.

## Хобби - кешегә ярҙам итеү

Ир кеше өй һалырға, ағас ултыртырға, малайҙар үҫтерергә тейеш, тиҙәр. Был вазифаларымды мин арттырып үтәнем. Өйҙәрҙе берәүҙе генә түгел, бик күп һалырға тура килде. Ҡайһы ваҡыт мин педагог булырға тейеш булмағанмын, ә төҙөүсе булырға тейеш булғанмын, тип тә шаяртып ҡуям. Ағайҙарым менән ауылда, тегендә-бында тиҫтәгә яҡын бура күтәрҙек. Атайыбыҙ тәрбиәләгәнме был сифатты, барыһын да үҙебеҙ эшләйбеҙ. Бураны ла үҙебеҙ бурайбыҙ, үҙебеҙ күтәрәбеҙ, ҡалған эштәрен дә үҙебеҙ тамамлап ҡуябыҙ.

Пенсияға сыҡҡандан һуң ауылға ҡайтып йәшәргә тигән дә ниәт бар. Тик үҙебеҙҙең Күсәләр ауылында түгел, Өфөгә яҡыныраҡ бер башҡорт ауылында. Шуны күҙ уңында тотоп, беҙ әле ағайым һәм ике туған ҡустым менән Ҡырмыҫҡалы районының данлыҡлы Ибраһим ауылында йорт һалдыҡ. Әгәр ҙә балалар Өфөлә булып, үҙебеҙ алыҫта йәшәһәк, дөрөҫ булмаҫ, тип тә уйланыҡ. Был ауыл Өфөнән 50 саҡрымда ғына урынлашҡан. Ауылдың кешеләре гүзәл, тәбиғәте матур, күркәм күлдәре бар. Йүрүҙән буйында үҫкәс, беҙ һыуһыҙ йәшәй алмайбыҙ бит инде. Үҙебеҙ тыуған ауылыбыҙға ла хәлебеҙҙән килгәнсе ярҙам итергә тырышабыҙ.

Минең ике хоббием бар. Береһен әйттем инде, мин төҙөлөш менән булышырға яратам, икенсеһе - мин кешегә ярҙам итергә яратам. Атайыбыҙ менән әсәйебеҙ ҙә беҙҙе кешегә ярҙам итергә оялмаҫҡа өйрәтте. Кешегә ярҙам итеү ихтыяжы ла уларҙан килә.Мин кешегә ярҙам итә алмаған мәлемде иҫләмәйем, һәр ваҡыт ниндәйҙер юлын табам, булмаһа, уйлап сығарам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бер көн артҡа ҡалһаң, биш көн буйына ҡыуып етә алмаҫһың", тиелә бер халыҡ мәҡәлендә. Ҡанундар ғына түгел, төшөнсәләр һәм мәғәнәләр көнләп, сәғәтләп үҙгәргән елдәй заман әҙәм балаһынан да шундай уҡ йылдамлыҡты һәм йылғырлыҡты талап итә. Ә етәксе булған кеше замандан саҡ ҡына алдараҡ бармаһа, саралар күрмәһә, уға үҙ эҙмышын ышанып тапшырыусылар ваҡыт арбаһынан төшөп ҡалыуы ла ихтимал. Әгәр ҙә үҙ эҙмышын ышанып тапшырыусылар үҫмерҙәрҙе, уҡыусы балаларҙы тәшкил итһә, был осраҡта етәксе кеше тотош кешелектең киләсәге өсөн яуаплы. Туҡтауһыҙ эҙләнеүсе, хәрәкәттә булыусы Таһирйән Мөхәммәт улы ана шундай яуаплылыҡты үҙ иңендә тойған етәксе.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

✓ ***Бүреләр тормошо менән йәшәй килә Ҡансығай шуға ныҡлап инанды: ғаилә ҡороп һәм өйөргә уҡмашып көн итеү - уларҙың иң көслө яғы. Шунһыҙ уңышлы һунар итеү ҙә, үҙ-үҙеңде ер йөҙөнән юйылыуҙан һаҡлау ҙа мөмкин түгелдәр.***

**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН**

# ҠАНСЫҒАЙ

**Хикәйә**



Сыуағына ҡарағанда йонсоуы күберәк булған көҙ миҙгеле үтеп, ҡышҡы һалҡындар башланды. Был ваҡытта инде Ҡансығай көүҙәгә ныҡ тартылып, тамам эт ҡорона тулғайны: әле көсөк кенә булыуына ҡарамаҫтан, боттары оҙон, тәпәйҙәре өлкән. Билдәһеҙ тоҡомдан булһа ла, киләсәктә уның арыу уҡ эре һөйәкле эткә әүереләсәге күренеп тора ине.

Быйылғы ҡыш бигерәк ҡаты килергә самаланы, ахырыһы - ҡар яуыр-яумаҫтан сасҡау һыуыҡтар төштө. Ләкин кинәт ябырылған ҡыш һалҡыны Ҡансығайға әллә ни ҡурҡыныс түгел: уның өҫтөндә йөндәре йылҡылдап торған йылы тун. Йәш хужа яҙ уҡ әтмәләп биргән ояға инеп боҫаһың да, уны тының менән йылытып тик ятаһың. Уныһы шулай ҙа, тик бына тамаҡ яғы хөртәйҙе. Әлеге мәсьәлә арҡаһына муҡсай аҫҡан Шәфҡәтле малай иптәштәренә эйәреп, һуңлап булһа ла күрше ауыл мәктәбенә уҡырға киткән көндән ҡырҡыулашты. Әлбиттә, йәш хужа ялға ҡайтҡан саҡтарында Ҡансығайҙың ашарына бирә, әммә ул китеү менән яңынан ураҙа башлана. Хужабикә онотҡанда бер ҡатҡан икмәк һынығы, һөйәк-һаяҡ ырғыта ла, тик улар менән генә тамаҡ туямы һуң? Бигерәк тә, бынауындай һалҡында.

Ҡансығай, үҙ йүнен үҙе күрмәк булып, ауыл тирәһен ҡыҙырып ҡараны. Ихтимал, ашарға яраҡлы тәғәмгә юлығыр. Кем белә, бәлки, берәй ерҙә емтек-фәлән осрар. Ләкин ауылда ул бер үҙе генә түгел - бында электән йәшәгән эттәр ашарын ашап, мөнйөрөн мөнйөп бөткән. Төп хужалар ауыҙына эләкмәй ниҙер ҡалған хәлдә лә, улар күптән ҡар аҫтында. Ярай ҙа, тыныс ҡына эҙләнергә бирһәләр: ауыл араһына сығыуың була - ҡойроҡ аҫтыңды еҫкәп ҡаңғыртырға торған арландар һырып ала. Ул хаяһыҙҙарҙы һинең асмы, туҡмы икәнең ҡыҙыҡһындырмай, уйҙары - икенселә.

Аптырағандың көнөнән Ҡансығай, бер нисә мәртәбә тау ашаһына төшөп, йәш хужаға мал көтөшкән ерҙәрҙә йәнлек ауларға маташып ҡараны. Ләкин ҡырҙан да саф һауа еҫкәп кенә ҡайтырға тура килде - кейектең эҙе бар ҙа, үҙе юҡ. Дөрөҫ, бер көндө Ҡансығай көрттө өңөп боҫоп ятҡан ҡуян өҫтөнә барып сыҡты, тик этте күреү менән оҙон ҡолаҡ йәшеренгән урынынан ҡубарылды ла йән-фарман тауға ҡарай һыпыртты. Сапҡан саҡта артынан буран уйнап ҡалған януарҙы тоторһоң, тотмай ни!

Эйе, ҡышҡы оҙон төндә ас ятыуы бер ҙә ҡыҙыҡ түгел. Етмәһә, былай ҙа бошонҡо күңелде шомға һалып, бүреләр олой. Ҡансығай уларҙың һиҫкәнергә мәжбүр итеүсе һағышлы ла, дәһшәтле лә ауаздарын һәр төндә ишетә. Бүреләр олоған саҡта, ғәҙәттә, ауылдағы эттәр өрөүҙән туҡтай, бары тик уларҙың ҡурҡыуҙан ара-тирә сыйнап ҡуйыуы ҡолаҡҡа салынып ҡала. Һуңғы арала самаһыҙ күбәйеп киткән йыртҡыстар олоу менән генә сикләнмәйенсә, йыш ҡына төнгө ауылға һөжүм итә, түбәләре насар ябылған йәки ҡапҡалары хөртөрәк бикләнгән ҡураларға инеп, һарыҡ-кәзәгә ҡырғын һала, хатта эре малды тамаҡлап сыға. Үҙ биләмәләрен һаҡлап ҡаршылашҡан сарға эттәр ҙә уларҙың ҡорбанына әүерелә ине.

Бүреләр ауылға сираттағы баҫҡын яһаған төндәрҙең береһендә Ҡансығай йәшәгән йорт ихатаһына Аҡъял килеп инде. Был йәш, ҡеүәтле йыртҡыстың елкә йөндәре ай яҡтыһында йылҡылдап, ағарып күренгән өсөн көсөк уны эстән генә шулай атаны. Бүре, һаҡ ҡына баҫып, Ҡансығай ятҡан оя эргәһенә килде, еҫкәнә-еҫкәнә моронон тишеккә тығырға самаланы, ләкин уның ғәләмәт ҙур башы торлаҡтың тар ауыҙына һыйманы. Көсөктөң танауына бығаса таныш булмаған ҡырҡыу еҫ килеп бәрелде. Уның был дәһшәтле ҡан ҡәрҙәше менән тәүге осрашыуы ине, шуға күрә, ҡурҡыуҙанмы, һаҡланыу тойғоһона буйһоноуҙанмы, кесе бәүеле бүленеп сыҡҡанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Шыйыҡсанан таралған еҫ буйынса уның икенсе енестән икәнен һиҙгән Аҡъял ситкәрәк китеп ултырҙы ла эт өрөүенә оҡшатып әкрен генә ләңкелдәп ҡуйҙы. Яҙмыштары мәңгелеккә айырылып, телдәре ярым онотолһа ла, бүренең ни аңғартырға теләгәненә төшөндө Ҡансығай - ул йыртҡыстың "Сыҡ, сыҡ!" тиеүе ине. Әммә ҡото алыныуҙан дер-дер ҡалтыранған көсөк ҡымшанманы ла - ояның ауыҙын тар итеп яһаған Шәфҡәтле малайға эстән генә рәхмәт әйләп, урынында ята бирҙе.

Бынан һуң күпмелер ваҡыт үткәс, Аҡъял йәнә килде - күрәһең, Ҡансығайҙы үҙ итте. Тик оя ауыҙына томшоғон тығып, күпме генә еҫкәнмәһен, нисек кенә үҙ янына саҡырмаһын, көсөк уның арбау-юхалауҙарына битараф ҡалды. Ғәжәпкә ҡаршы, был юлы ул бүренән бөтөнләй ҡурҡманы. Сыҡмауының сәбәбе - Аҡъялға үҙенән нимә кәрәк булыуын һиҙенеү ине. Ул бит ҡыш башында ауылдағы арлан эттәрҙең ҡайһы ерҙе еҫкәргә ымһыныуҙарын яҡшы хәтерләй. Кит һин бынан, Аҡъял, кит, миндә әлегә уның ҡайғыһы юҡ!..

Ныҡыш бүренең өсөнсө тапҡыр пәйҙә булыуы Ҡансығайҙан шәһүәт һуты бүленә башлаған мәлгә тура килде. Был уның көсөклөктән сығып, инә эткә әүерелеүен, ғүмеренең тоҡом ҡалдырырға һәләтле дәүеренә аяҡ баҫыуын аңлата ине. Аналыҡ һуты Ҡансығайҙың булмышында нәҫел ебен дауам итеү теләген уятты. Был бөйөк тойғо ҡеүәтле тулҡын булып уның аңын томаланы, ихтыярын үҙенә буйһондорҙо. Ҡансығай, ояһынан сығып, ел ҡапҡа аша урамға һикерҙе һәм, әленән-әле туҡтап, кесе бәүелен әҙләп бушата-бушата, йәйгеһен мал көткән яҡҡа йүнәлде. Ул ниңә шулай эшләгәнен үҙе лә аңламай ине: арттан төшкән арланды ситкә ебәрмәҫ өсөнмө, әллә уны сихырлап, дәртен оторо ҡуҙғытыу маҡсатынанмы?

Түҙемлеге бөткән Ҡансығай Эйәле ҡыуаҡ эргәһендә туҡтаны. Ул тамыҙа барған сихри билгеләрҙе еҫкәй-еҫкәй баҫмалатып килгән бүре мораҙына яҡынлашты. Шул саҡ, гүйә, ваҡыт ағышынан туҡтаны ла, борон-борон заманда ҡалған таш быуат бөгөнгөнө ҡыуып етте. Әлеге дәүер, киреһенсә, артҡа шыуып, мәмерйәгә инеп ятты. Ҡараңғы төн яҡты көндө ҡыуып етте лә, улар бергә ҡушылды. Донъялағы таҡ тигән төшөнсә йопҡа әүерелде...

Ҡарығышып бөткәс, бүре Ҡансығайҙы әүрәтә-әүрәтә өңөнә алып китте. Аҡъял үҙе генә тоҫмаллаған һуҡмаҡ буйлап оҙаҡ ҡына барҙы. Бәлки, ул аслыҡтан әлһерәп килгән Ҡансығайға шулай тойолған ғыналыр. Һирәк ағаслыҡтар үҫкән бейек тауҙы аша төшкәс, ҡуйы урман менән ҡапланған һөҙәгерәк артылыш башланды. Аҡъялдың өңө әлеге тауҙың ашаһында булып сыҡты. Ул ерҙән үҫеп сыҡҡан ғәләмәт бейек һәм текә ҡая аҫтында урынлашҡайны. Өңдөң ауыҙы тарыраҡ булһа ла, эсе иркен генә ине. Ләкин ҡорһаҡтың торошо торлаҡтың дәүмәленә бәйле түгел - тамағың туҡ булһа, ҡыҫынҡы оя ла киң күренә. Бүре шуны яҡшы аңлаған йыртҡыс булып сыҡты - өңдөң төбөнәрәк үтеп, унан туңған ит киҫәге һөйрәп килтерҙе. Был - уның тарафынан һаҡлыҡҡа ҡалдырылған ҡоралай бото ине. Аҡъял үҙе "Аша, аша!" тигәнде белдереп ләңкелдәп ҡуйҙы ла, ситкәрәк барып ятты. Ҡансығай "Бының бөтәһе лә миңәме?" тигәндәй, шикләнеңкерәп, башта алдындағы итте ипләп кенә еҫкәп ҡараны, һуңынан, һыйҙың ихлас икәнлегенә инанғас, ҙур кинәнес менән туң итте кимерергә тотондо.

* * *

Ҡансығайҙың уйламаған-нитмәгәндә Аҡъял менән йоплашып йәшәй башлауына хәтһеҙ ваҡыт үтте. Ғаилә булып бергә тереклек итеү осоронда уның көсөкләмәгән йылы бик һирәк булды. Аҡъял менән икеһенән тыуған игәрҙәрҙе бергә ҡушһаң, улар тотош өйөр хасил итер ине. Яҙмышының ҡырҡа үҙгәреп китеүе көсөклөк дәүеренән сығыр-сыҡмаҫ мәлгә тура килгәнлектән, Ҡансығайға бүре тормошона күнегеп китеүе әллә ни ауыр булманы. Дөрөҫ, ул башта үҙе эҫенергә өлгөргән ауылды, биләмәһенә әүерелгән ихатаны, бигерәк тә Шәфҡәтле малайҙы һағынып ыҙаланы, йәй көнө бергәләшеп ауыл малын көткән саҡтарҙы юҡһынды. Йәш хужа бит уны шундай яратып, иркәләп кенә үҫтерҙе! Ауыл яғы иҫенә төшөп, яманһыулаған саҡтарында ул бер-ике мәртәбә ҡайтып китергә лә уҡталып ҡуйҙы. Әммә... Әлеге "әммә"һе бар шул: һуңғы сиктә Ҡансығай ундағы аслы-туҡлы көндәрен хәтеренә төшөрҙө лә был уйынан дүнде. Ә аҙаҡтан ул ниәтенән бөтөнләй төңөлдө.

Сағыштырмаса йәш булыуына ҡарамаҫтан, Аҡъял бик тоғро иш булып сыҡты - Ҡансығайға бер ваҡытта ла хыянат итмәне. Һәр хәлдә, урамдан үткән һәр бер кәнтәй артынан сабырға әҙер торған арлан эт түгел инде. Бүренең хәстәрлекле ата икәнен дә танымай булмай - Ҡансығай көсөкләп ятҡан көндәрҙә, уның имсәгенә һөт төшһөн өсөн, аҙыҡтан өҙмәне. Һуңынан, балалары үҫә төшкәс, урман тулы ҡыр йәнлеген тотоп ашай ҙа, өңгә ҡайтып, улар алдына ит ҡоҫа. Ә беҙҙең эт халҡы һуң? Өйөгөшкән саҡта өйөр булып тамшанып йөрөһәләр ҙә, аҙағынан, бер-береһенә һылтанып, көсөктәрен дә, уларҙың инәләрен дә белмәмеш тә күрмәмеш.

Әлеге лә баяғы, йән аҫрау яғын алайыҡ. Был мәсьәләлә эттәр тулыһынса кешеләргә һалынған - үҙ тамағын үҙе туйҙырырға һәләтлеләре бик һирәк. Бүреләргә килгәндә, уларҙың барыһы ла һунарсы - аусылыҡ ҡомары һәммәһенең булмышына һалынған. Бүреләр тормошо менән йәшәй килә Ҡансығай шуға ныҡлап инанды: ғаилә ҡороп һәм өйөргә уҡмашып көн итеү - уларҙың иң көслө яғы. Шунһыҙ уңышлы һунар итеү ҙә, үҙ-үҙеңде ер йөҙөнән юйылыуҙан һаҡлау ҙа мөмкин түгелдер, моғайын.

Аҡъял менән йәшәй башлағаны бирле Ҡансығай ныҡ үҙгәрҙе - йыртҡыстар тормошона күнегеү генә түгел, ситтән ҡарағанда үҙе лә бүрегә оҡшай төштө: һәр ваҡыт хәрәкәттә булғанғамы, гелән ҡыр йәнлектәренең ите менән туҡланғанғамы, боттары йыуанайҙы, тарамыштарҙан ғына торған тәне тығыҙланды. Хатта уның аяҡ баҫҡан һайын тирә-яҡты байҡап, аусыларса һаҡ ҡына атлап йөрөүе лә бүренеке ине.

Әлбиттә, йәнлек ауыҙға үҙе килеп инмәй - тамағың һыйлы булһын тиһәң, уның артынан байтаҡ ҡыуырға тура килә. Ҡалдырған эҙе, йә булмаһа, аңҡытҡан еҫе буйынса януарҙы эҙләп табыуы, йәшеренгән урынын асыҡлауы ауыр түгел, тик уға ла йән ҡәҙерле, шуға күрә, ҡаса торған холҡо бар. Ғәҙәттә, өйөргә тупланып көн иткән бүреләр үҙҙәре ымһынған кейекте ян-яҡтан ҡамап тота. Икәү генә булғанлыҡтан, Аҡъял менән Ҡансығай күпселек осраҡта һунар итеүҙең боҫҡон ысулын файҙаланды. Ниндәйҙер аңға һыймаҫ эске һиҙемләү буйынса сираттағы ҡорбанының ҡасыр йүнәлешен дөрөҫ билдәләгән Аҡъял боҫҡонға ята, ә Ҡансығай, саңҡылдап өрә-өрә, йәшеренеп ятҡан урынынан йәнлекте өшкөтөп сығара. Өрккән януар ышыҡтан атылып сыға ла туп-тура бүрегә табан саба. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй ҡасҡан ҡорбан үҙе менән тиңләшкәс, Аҡъял боҫҡан урынынан ҡалҡына ла уның өҫтөнә ырғый.

Һунар - тотороҡһоҙ шөғөл, уның уңыштары ла, уңышһыҙлыҡтары ла алмаш-тилмәш. Ҡайһы саҡта көнө буйы йөрөп тә бер тере йән осратмайынса, телде арҡыры тешләп өңгә ҡайтып йығылырға тура килгеләй ине. Иртәгәһенә иһә ризығына яҙған кейек юлыңа үҙе ҡаршы сыға ла кисәге көндөң уңышһыҙлығы менән аслығын оноттора.

* * *

Шулай йәшәй торғас, Ҡансығай үҙенең ҡартая башлағанын тойҙо. Уның беренсе билдәһе - түлдән ҡалыу ине. Эй, ғүмер!.. Ҡайҙа булды Ҡансығайҙың тәүге аналыҡ һуты бүленеүҙән илереп, нәҫел ҡалдырыу ғәмәленән һушын юйған саҡтары? Күрәһең, ундай мәлдәр тик бер генә була ла бүтәнсә ҡабатланмай. Тештәрҙең берәм-берәм ҡойола башлауын да ҡартлыҡ ғәләмәте тимәй, ни тиһең? Ә бит ауланған ҡыр йәнлектәренең хатта бот һөйәктәрен онтарға яраҡлы ул тештәр мәңге ҡаҡшамаҫ кеүек ине. Күҙҙәр ҙә элекке осҡорлоғон юғалта, ахырыһы - алыҫтараҡ шәүләләнгән кейек-маҙарҙы айырып бөтмәй. Өҫтәүенә, һуңғы ваҡытта Ҡансығайға билдәһеҙ һағыш ябырылды. Был да әлеге шул олоғайыуға бер ишаралыр. Уның, башын алғы тәпәйҙәренә һалып, көндәр буйы моңайып ятҡан мәлдәре йышайҙы. Ундай саҡта Ҡансығай, үҙенә генә билдәле уйҙарға бирелеп, бер нөктәгә текләп, оҙаҡ ҡына ваҡыт хәрәкәтһеҙ ҡала. Ята торғас, үҙе лә һиҙмәҫтән, күҙҙәре йомола ла, булмышы хәтирәләр дарьяһына сума.

Ғәжәпкә ҡаршы, Ҡансығай инәһен йүнләп хәтерләмәй ине. Уның хаҡындағы өҙөк-һурыҡ иҫтәлектәрҙең береһе - тәме һаман онотолмаған имсәк һөтө, икенсеһе - мәңгегә айырылышҡан көндәге йөрәк өҙгөс шыңшыу. Ул әле булһа ҡолаҡ төбөндә сыңлап торғандай. Ҡансығайҙың аныҡ хәтирәләр сылбыры Ҡараңғы сырайлы хужаның ҡола яланда уны ташлап киткән көнөнән башлана. Кү-

рәһен, ныҡ тетрәнеү касафатылыр.

Ҡансығайҙың ғүмерендәге иң яҡты иҫтәлектәр Шәфкәтле малай һәм уларҙың ауылында уҙған гәмһеҙ осор менән бәйләнгәйне. Өй хужалары, ҡайһы саҡта уны көтөүгә алып бармайынса, бәйләп китеп зарыҡтырһалар ҙа, ниндәй бәхетле мәлдәр булған икән! Ә һуң аҙаҡтан Шәфкәтле малай менән икәүҙән-икәү ауыл малын көткән көндәрҙе нисек онотаһың? Ул бигерәк тә йәш хужаның иркәләп баштан, муйындан һыйпауҙарын һағынды. Шәфкәтле малай хәҙер үҫкәндер, ҙурайғандыр инде. Их, бер тапҡыр булһа ла күҙ һалырға ине үҙенә! Ысынлап та, ә ниңә барып күрмәҫкә? Хәтһеҙ йылдар уҙһа ла, ул әле ауылға юлды онотмаған.

Берҙән-бер көндө һағыныуюҡһыныуҙарына түҙер әмәле ҡалмаған Ҡансығай ауыл яғына юлланырға ҡарар итте. Ни булһа, шул булыр, уға яҙмыштың ҡырҡа боролоштарына өйрәнәһе түгел. Шәфкәтле малайҙың танымау ихтималлығы ла, ҡасып киткән өсөн рәнйеп ҡабул итмәй ҡуйыуы ла ҡурҡытмай Ҡансығайҙы. Ҡабул итмәһә лә ихтыярында, сөнки ҡаушап, бәлтерәп бөткән көнтәй кемгә хәжәт? Улайға китһә, урманда кемгә кәрәк ул? Аҡъялғамы? Эйе, уларҙың әсенешеп, бер-береһенә мохтажлыҡ кисергән саҡтары бар ине. Бына хәҙер, Ҡансығай тулдән ҡалғас, уныһы ла юҡҡа сыҡты. Аҡъял менән айырылышыуы ғына ҡыйынраҡ - ни тиһәң дә, барлыҡ аңлы тормошо уның менән ингә-ин терәшеп үтте бит. Ана, ҡасандыр гәйрәте ташып торған, хәҙер инде ҡартайған бүре, ҡолаҡтарын шымтайтып, бойоҡ ҡына ҡиәфәттә өң алдында ята. Һынсыл һағайыу менән баҡҡан күҙҙәре уның барыһын да аңлағанын күрһәтеп тора ине. Бына, Аҡъял әкрен генә тороп ултырҙы ла "Кал, ҡал!" тигәндә аңғартып, ләңкелдәп өрөп ҡуйҙы. Ләкин Ҡансығайҙы был ғына туҡтатырлыҡ түгел ине. Ул, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, бүрегә һуңғы тапҡыр ҡараш ташлағандан һуң, "Кәрәгем ҡалманы бит инде..." тигәндә белдереп, шыңшый-шыңшый ауыл тарафына ыңғайланы.

* * *

Ҡансығай Эйәле ҡыуаҡ менән ауылды айырып торған тау түбәһенә менеп етте. Бынан, юғарынан, барыһы ла арыу уҡ һәйбәт төҫмөрләнә. Алда ике тау араһынан күренгән дала йәйрәп ята. Ул күҙ күреме ерҙә күк көмбәҙе менән барып тоташа. Уларҙың икеһе лә Ҡансығайға яҡынлашып килгән әнер төҫөндә һынлана ине.

Ауыл әллә ни үҙгәрмәгән - һаман шул бәләкәй генә көйө. Дөрөҫ, уның ике осонда берәр өй өҫтәлгән. Ә ауыл уртаһындағы бер йорттоң урыны ғына тороп ҡалған, күрәһең, уны һүтеп, икенсе ергә күсереп алып киткәндәрҙер. Ҡансығайҙың ҡолағына балалар ҡысҡырышҡан, эттәр өргән ауаздар ишетелде. Бына, ҡайҙалыр һуҙып-һуҙып һыйыр баҡырҙы, шөңгәр тауышы сығарып ҡолон кешнәп ҡуйҙы.

Иҫ киткес таныш ауаздарҙы ишетеүҙән, гәзиз ерҙәрҙе күреүҙән йөрәкһеҙгән Ҡансығай тауҙан төштө, һаҡ ҡына баҫып ауыл урамына яҡынлашты. Быһа, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һыуға йөрөй торған тыҡрығы. Унан Ҡансығай ҡасандыр йәшәп киткән йорт яҡшы күренә. Шәфкәтле малай өйҙә микән? Әгәр өйҙә булһа, сығып күренмәҫме? Ҡансығай картуф баҡсаһын кәртәләгән ситән буйындағы кесерткән һабаҡтары араһына инеп ятты ла, урам ашаһындағы һәр бер һыҙаты таныш йортто күҙәтергә керешә. Әгәр иҫән булһа, йәш хужа бер сыҡмаһа, бер сығыр. Бөгөн булмаһа, иртәгә күренер. Кәрәк икән, Ҡансығай ошонда төн үткәрергә әҙер.

Ошолай күпме ятҡандыр, ҡапыл, әнер һиллеген телеп, ауыл осондараҡ бер эт олоп ебәрҙе. Уның артынса тәгәрмәстәр таҡылдауы, арба шығырлауы ишетелде. Күп тә үтмәне, Шәфкәтле малайҙың өйө алдына егеүле ат килеп туҡтаны. Ниҙер һиҙенгән Ҡансығай, кесерткән араһынан сығып, арт аяҡтарына ултырҙы. Эттәр бушҡа олоймо һуң инде? Улар, төҫтө айырмаһа ла, Ғәзраилды күреүе берҙәнбер йән эйәһе. Үлем фәрештәһенең яҡынлашҡанын шөйләгән эттәр шуға шомланып олой ҙа инде. Ул яуыҙы Ҡансығай ҙа күрҙе: арбаның артындараҡ ултырған Ғәзраил күсерҙең хәрәкәттәрен иғтибар менән күҙәтә ине. Ҡыланышына ҡарағанда, алыпһатарға оҡшаған кеше арбанан төштө лә, шалтыр-шолтор килеп тоҡ әсенән ниҙер алды. Быны күргән үлем фәрештәһе ҡыуаныстан ҡулдарын ыуғылап ҡуйҙы.

Ҡансығай барыһын да аңланы: күсерҙең ҡулында үлемесле әйбер! Шәфкәтле малайға һәләкәт янай! Юҡһа, бында Ғәзраил ниңә эйәреп килһен? Тимәк, йәш хужаның эштәре насар. Тиҙерәк, тиҙерәк!.. Ҡансығай бер нисә һикереүҙә арба эргәһенә килеп етте һәм, һуңғы көсөн йыйып, ҡулына йылтыр шешә тотоп ҡапҡаға йүнәлгән күсерҙең өҫтөнә ырғыны. Ҡалған ғына тештәрен алыпһатарҙың боғаҙына батырҙан алда Ҡансығай уны танып өлгөрҙө: Ҡараңғы сырайлы хужа!..

Ҡансығайға Шәфкәтле малайҙы күрергә насип булманы: ҡурҡыуҙан, ауыртыуҙан ергә йығылған Ҡараңғы сырайлы хужа, ҡулындағы араҡы шешәһен ҡапҡа алдындағы ташҡа һуғып ватты ла, уның бүре тешен һымаҡ үткер ярсыҡтары һерәйеп торған өлөшө менән һөжүм итеүсенең ҡорһағын йәнтәслим телгеләргә керешә. Ләкин Ҡансығай, аҫтында тыпырсынған бәндәнең үлемесле сәнсеүен тойған һайын, тештәрен һығыраҡ батырҙы.

Бер аҙҙан ҡорһаҡты телгеләүҙәр туҡтаны - Ҡараңғы сырайлы хужа хәрәкәтһеҙ ҡалды. Унан һуң йәне менән тәнендә ғәжәп еңеллек тойған Ҡансығай ҡорбанын ысҡындырҙы һәм хәүеф-хәтәрҙән, йәбер-золомдан азат булған икенсе, ят бер донъяға олғашты.

(Аҙағы. Башы 7-се һанда).

МАТУР ХӘТИРӘ

# АБРУЙЫ БӘХӘСҺЕҘ ИНЕ

**Баязит Бикбайҙы беренсе башлап Башҡорт дәүләт университетында уҡып йөрөгән (1962-1967) йылдарҙа күргәйнем. Филология факультеты студенттары менән осрашырға килгәйне ул. Үҙен үтә баҫалҡы тотоуы, тоноғораҡ, әммә тойғоло тауыш менән һөйләгәне, төрлө һорауҙарға етди, шулай уҡ бер аҙ ғына мәрәкәләп яуаптар биргәне хәтерҙә ҡалған. Бер нисә йылдан ҙур яҙыусы менән яҡындан танышыу мөмкинлеге тыуҙы.**

Башҡортостан китап нәшриәте 1969 йылға, Баязит Бикбайҙың 60 йыллыҡ юбилейына, уның томдарын сығарыуҙы планлаштырҙы. Беренсе томында поэтик әҫәрҙәре тупланһа, икенсе томында яҙыусының "Аҡселән ташҡанда" романын сығарыу ҡаралғайны. Быныһын миңә беркеттеләр. Билдәле, нәшриәттә китап әҙерләү эштәре алдан уҡ башлана. 1968 йылдың (ғинуарҙа булһа кәрәк) бер көнөндә Баязит ағай нәшриәткә үҙе килеп сыҡты. Әҙәбиәт бүлеге мөдире Агиш Ғирфанов, унайлы мәлен тап килтереп, минең менән таныштырып, ағайҙың китабының икенсе томының мөхәррире икәнемде әйтте.

Баязит ағай, йомоштарының ҡайһы берҙәре хаҡында һөйләшкәс, хәл иткәс, бер мәл минең янға килеп ултырҙы ла ҡайһы райондан булыуым, Өфөлә ҡайҙа тороуым, нимәләр яҙыуым тураһында һорашып алды. Һуңғы һорауына ҡыйыуһыҙ ғына яуап биргәнемде һиҙептме, Баязит Бикбай: "Ә һин яҙ, ҡурҡма, тәүәккәлерәк бул, ижад шунһыҙ бармай ул. Әле баҫмаһалар, исемең булғас, баҫалар ул", - тине. Унан, үҙенең ижадына күсеп, ҡайһы бер әҫәрҙәренең байтаҡ йылдар элек яҙылыуын, тик һуңғы йылдарҙа ғына баҫылып сығыуын һөйләп ҡуйҙы.

Ошо танышыуҙан һуң мин уны нәшриәттә яңынан күргәнемде хәтерләмәйем. Ҡайһы бер тиҫтерҙәренән айырмалыраҡ, ул былдай урындарға ла һирәгерәк йөрөй торғайны.

Ошо, 1968 йылда, Баязит Бикбай ҡапыл вафат булып ҡуйҙы. Нәшриәт хеҙмәткәрҙәре лә бик ауыр кисерҙе был көтөлмәгән ҡайғыны. Бер көндө беҙҙең редакцияла мәшһүр яҙыусының һайланма әҫәрҙәрен тулыһынса сығарыу хаҡында һүҙ ҡуҙғатылды. Ошо һөйләшеүҙән һуң тематик планда күрһәтелгән ике томға ла "Баязит Бикбай. Һайланма әҫәрҙәр. Биш томда" тип яҙҙыҡ та ҡуйҙыҡ. Үҙебеҙ, әлбиттә, ҡурҡа төштөк. Тик нәшриәт етәкселәре лә, Өлкә Комитет та - бер кем дә беҙҙең был башбаштаҡлыҡҡа ҡаршы сыҡманы, кем рөхсәт итте, тип бәйләнмәне. Хәйер, аптырарға урын да юҡ ине: оло талант, атаҡлы шәхес Баязит Бикбайҙың абруйы ана шундай һүҙ әйткеһеҙ ҙур һәм бәхәсһеҙ ине.

Ғәжәп шәхестәр булды аҡһаҡалдарыбыҙ!

**Риф МИФТАХОВ.**

КЕНДЕГЕ БЕРЕККӘН...

# ...ҠАРМАҠҠА, БАЛЫҠҠА



**Эйе, ир-егеттең кендеге береккән мауығыуҙарының береһе - ул ҡармаҡ, йылға буйы, балыҡсылыҡ. Беҙҙең Белорет төбәгендә "ата балыҡсы" тигән төшөнсә бар. "Ата", тимәк, иң шәп. Мин үҙем дә шул иҫәптә!**



Олатайым да, атайым да ғәжәп оҫта балыҡсы ине. Ялтырмаға ла, ябай ҡармаҡҡа ла, һалдаулап та, мәскәүләп тә тота ине улар балыҡты... Ой-һой! Анлайһыҙҙыр, тим, һағынышлы елкенеүҙәремде. Белорет менән Ғафури районлары ҡауыштырған тау-урманлы Еҙем буйында бағры, бәрҙе кеүек үҙе аҫҡа, үҙе эре балыҡтар сығыр ине бит элек. Башҡа һыуҙар менән сағыштырғанда, хәҙер ҙә ул йылғаларҙан табышһыҙ ҡайтмаҫҡа мөмкин.

"Атай балыҡсы" тигәне лә ҡулланылышта беҙҙең яҡтарҙа. Үҙем шаһит: һаҡауыраҡ бер малай ятыуҙан терһәк буйлы бәрҙе һөйрәп сығарғайны. "Атай балыҡ ҡапты", тип, оҙон-оҙаҡ ҡыуанып йөрөгәс, был һүҙ барса ауыл теленән төшмәне. Ана шул малай саҡта уҡ йөкто миңә балыҡсы "сире". Үкенмәйем, сөнки уның һәйбәт сир икәнлегенә күптән инанғанмын.

Бәләкәйҙән кәтүкле спиннинг, ябай ҡыуал менән ҡармаҡларға әүәҫләндем. Хабаровский крайында әрмелә хеҙмәт иткәндә лә тайга "атай"ҙарын байтаҡ ҡаптырҙым. Араларында 3-5 кило тарткандары ла бар ине. Университет тамамлап, Өфөлә төпләнгәс, журналистар Ғәтиәт Үзбәков, Зариф Яматов мәрхүм ағайҙарға (икеһе лә ата балыҡсылар ине!) эйәреп, бик күп һыу-күлдәрҙе айҡарға, көнөнә 20-40 саҡрым тәпәйләргә насип итте. Бына һиңә физкультура! Элегерәк хатта Матбуғат йорто етәкселәре һәүәҫкәр балыҡсылар өсөн шәмбе һайын тиерлек махсус автобус йә күпләүле машина бүлә торғайны. Татарстан күлдәренә лә барғыланыҡ.

Былтыр-быйыл ғына алыҫ сәфәрҙәрҙе ярайһы һирәгәйттем. Берҙән, күп йөрөү быуынды ала, икенсенән, һуңғы осор балыҡтарҙың үрсеме ҡайҙа ла кәмей. Һыуҙарҙың әсенән һайығыуы сәбәпсе быға. Һәүәҫкәр балыҡсылар ҙа күбәйә. Рәсәйҙә хәҙер улар биш миллион теркәлгән, етмәһә, балыҡсылыҡ индустрияһы ғәжәп йылдам үҫешә.

Ау, йылым кеүек тыйылған ҡорамалдарҙы енем һөймәй. Ғөмүмән, ысын балыҡсы ризыҡ артынан ҡыумай. Тәбиғәтте аңлаған, уны тиктомалға тәләфләмәгән кешенең асылы ла боҙоҡ булмай. Шуға күрә, бала-сағаның балыҡ тотоу менән сама белеп кенә мауығыуын хупларға кәрәк.

Әҙәби ижадҡа ҡамасауы бармы "сир" ле һәм серле шөғөлдөң? Бәлки.... Ике тәүлегең бушҡа сарыф ителгән дә кеүек бөгзе мәл. Улай тиһәң, белгән-аралашҡан байтаҡ яҙыусыларҙың заманында ата балыҡсы булғаны күптәргә мәғлүм. Әйтәйек, Әмир Чаныш, Нурислам Шәйхулов, Ринат Хәйри, Әхмәт Орбелин, Фәрит Иҫәнғолов, Ағиш Ғирфанов... Әҙиптәрҙең был шөғөлөн ниндәйҙер кимәлдә әҫәрҙәрендә лә төҫмөрләргә мөмкин. Үҙемдең иһә, "Ҡыҙыл балыҡ", "Аҙашыу" хикәйәләрендә, "Имән бағана" повесында, "Хушлашмайым" һәм "Зәңгәр катер" романдарында ихлас балыҡсы йә браконьер образдарына апаруҡ урын бирелгән, киләсәктә лә бирелер, тим. Тағымы? Балыҡ аштарын үҙем әҙерләргә яратам. Балыҡ менән "һаташҡан" һүҙ оҫталары яҙмаларынан "Уңышлы балыҡсы әлифбаһы" исемле йыйынтыҡ та төҙөгәйнем бер мәл, шуларҙан бер нисә юл:

- Һыу буйҙарын бысратмай, шауламай йөрө.
- Әсе-мәсе йотма, балыҡ ҡаса!
- Ваҡ балыҡ эләкһә, кире ебәр. Әйтәйек, суртандың 40 см-ҙан, атауҙың урта бармаҡтан ҡыҫҡаһын.
- Мөмкин икән, балыҡ тоторға үҙҙәре теләгән бала-сағаны эйәртеп йөрө.
- Көнөнә ҡарап кейен: һаулыҡ балыҡтан ҡәҙерлерәк.
- Балыҡсының табаны ялтыр, тамағы ас, тигән һынамыш хәтерегеҙҙән сыҡмаһын.

**Сабир ШӘРИПОВ, яҙыусы.**

✓ *Тәмәке тартҡан, көнбағыш сиртҡән кешеләр ҙә һырғалаҡ янына килә алмай. Үткәрмәйем. Сөнки сүп-сарҙарын балалар йөрөгән ергә ташлайҙар. "Минең өсөн түгел - балаларығыҙ өсөн был таҙалыҡ, тәртип", - тим.*

ИНТЕРНЕТТАН



# КӨСЛӨ ЗАТ...

## кәйефте тоя белмәй

■ Әгәр ҙә гел генә йоҡо килеү менән көрәшәһегеҙ икән, был нормаль хәл тип белдерә экспертар. Бағтиһәң, февралдә күптәр шулай "йоҡоға тала" икән. Әммә яҙ айҙары етеү менән хәлегеҙ шунда уҡ яҡшырасаҡ. Март менән сағыштырғанда, февралдә беҙгә йоҡлап китеү өсөн 8 минутҡа ваҡыт күберәк кәрәк. Етмәһә, ҡыштың һуңғы айында кеше уртаса 10 минутҡа әҙерәк йоҡлай. 10 минут күп кеүек тойолмаһа ла, даими йоҡо туймау хәлһеҙлеккә килтерә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар бынан йонсой. Профессор Колин Эспи әйтеүенсә, биологик сәғәттәр тыштан ингән яҡтылыҡ ярҙамында көйләнә. Ә ҡыш ваҡытында был сигналдар насар айырыла, шулай уҡ йорттарҙағы йылылыҡ, ҡоро һауа насар йоҡоға килтерә.

■ Һоло ярмаһы йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарын булдырмай. Билдәле булыуынса, ҡан артерияһы стеналарының хроник ялҡынһыныуы йышыраҡ атеросклерозға килтерә. Һоло составындағы авенантрамидтар - фенол антиоксиданттары ҡан кәҙәнәктәренә артерия стеналарына ултырырға ҡамасаулай. Етмәһә, авенантрамидтар ялҡынһыныуҙы ла баҫа. Шуға ла һоло ярмаһы йөрәкте ишемик сирҙән һаҡлай һәм холестерин кимәлен түбәнәйтә.

■ Калифорния университеты ғалимдары асыҡлауынса, көнөнә өс сынаяҡ сәй эсеү оло йәштә лә хәтерҙе яҡшы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Улар тиҫтә йылдар буйына алына барылған 6 төрлө тикшеренеүҙәрҙе берләштереп, ошондай фекергә килгән. Сәйҙең файҙаһы шунда - уның составындағы тиамин ҡартайған кешеләрҙе Альцгеймер ауырыуҙарынан һаҡлай. Көн һайын сәй эсеүселәр аҡыл ҡеүәһен дә һаҡлап ҡала ала, хәтер менән бәйле проблемалар уларҙа өс тапҡырға һирәгерәк осрай.

■ Американың билдәле диетологы Джаред Кох тукланыу өсөн иң зарарлы ризыҡтар исемлеген төҙөгән. Уның иң өҫтөндә консерваланған помидорҙар тора. Шунда уҡ тимер банкаларҙағы башҡа ризыҡтар ҙа инә. Артабан төрлө өҫтәмәләр, антибиотиктар өҫтәлгән, етди эшкәртеү үткән ит һәм итле ризыҡтар тора. Өсөнсө урынды маргарин биләй. Диетологтар уны төрлө кислоталарға бай булғаны өсөн ҡулланырға кәңәш итмәй, тап ошо кислоталар ҡан тамырҙары эшенә кире йоғонто яһай. Зәйтүн һәм кокос майҙары ла был исемлеккә ингән, сөнки улар кеше организмында шешеү процестарына килтерә.

■ Тауыҡ ите, йомортҡа, ҡуҙаҡлылар, диңгеҙ балығынан торған диета баш мейеһе ҡартайыуын булдырмай һәм хәтерҙе нығыта. Быларҙың барыһын да холин - В витамины төркөмөнә ингән витамин башҡара. Британия ғалимдары асыҡлауынса, холинға бай ризыҡтар менән тукланыусылар төрлө тестарҙы яҡшыраҡ үтә. Ғалимдар билдәләүенсә, ул инсульт менән бәйле хәүефте лә түбәнәйтә.

■ Оҙайлы ваҡыт бергә йәшәгәндән һуң да ирегеҙ һеҙҙең кәйефегеҙҙе һәм теләктәрегеҙҙе тойорға өйрәнмәһә, борсолмағыҙ, тип мөрәжәғәт итә гүзәл заттарға ғалимдар. Көслө затҡа тәбиғәттән бындай һәләт бирелмәгән. Хәҙер бының шулай икәнлеген фән дә дөрөҫләгән. Эдинбург университеты хеҙмәткәрҙәре шуға ла улар барыһын да "күҙҙәрҙән һиҙер, ирендәрҙән уҡыр", тип көтмәҫкә, ә тураһын әйтергә кәңәш итә.

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ ИР-ЕГЕТ

# АУЫЛ БАЛАЛАРЫ...

## һырғалаҡ шыуһын, тип

**Күптән түгел Өфөлә йәшәүсе бер дуҫым шылтыратты. Бер ҡайтҡанында бала сағын иҫләп, ауылда тау шыуып, ыштан туҙҙырып килгән икән. "Махсус үҙәктәрҙәге һырғалаҡтарҙан да шәберәк килеп сыҡҡан", тип ебәрә, ауылдаш ағайҙың боҙ тауын маҡтап. Боҙ тауы өйөүсе ағайыбыҙ - Баймаҡ районы Темәс ауылынан Илдар Саварбаев була инде. Ул совет осоронан алып 90-сы йылдар аҙағынаса ауылда Йәш техниктар йортон етәкләне - өс тиҫтәгә яҡын йыл эсендә йөҙләгән ир баланы төрлө үҙйөрөшлө уйынсыҡ машиналар һәм ағастан йорт кәрәк-яраҡтары яһарға өйрәтте. Бөгөн ул беҙҙе ғәжәп оҫталыҡ һәм иҫ киткес түҙемлелек талап иткән тағы бер һөнәре -һырғалаҡ эшләү сере менән таныштырмаҡсы. Һүҙ - Илдар Саварбаевҡа.**



### Йәш техниктар йортонда

Балалар бер урында оҙаҡ ултырып сыҙай алмай. Үҫә торған организмға хәрәкәт кәрәк. Шуға ла улар бер туҡтауһыҙ йүгерә, шаяра, этелә-төртөлә. Йәш техниктар йорто асылғас, бер бүлмәгә "груша" элдек, бер ишек яғына турник яһаныҡ, урамға бер һырғалаҡ та эшләп ҡуйҙым: бәҙрәфкә сыҡҡан саҡта булһа ла шыуып инһендәр, хәрәкәтләнһендәр, тип уйланым. Минең уйым дөрөҫ булып сыҡты. Балаларҙы ҡыҙыҡтырыу өсөн эшләнгән һырғалаҡ - ғүмерлек хоббийыма әйерелде. Әле килеп, өй алдыма ейән-ейәнсәрҙәрем өсөн йыл һайын һырғалаҡ яһап ҡуям. Һырғалаҡ эшләүҙең сере ябай: дөрөҫ итеп әҙерләнгән урынға тәғәйен ваҡытта һыу ҡойорға, ҡар ташып, уны дөрөҫ формаға килтереп ҡатырырға ғына ҡала. "Бынығын ғына үҙебеҙ ҙә беләбеҙ", тиер кемдер. Эйе, беҙ бөтә нәмәне лә яҡынса беләбеҙ һәм бының менән маһайырға яратабыҙ. Әммә һәр эштең үҙ оҫтаһы була. Ниндәй генә эшкә тотонһаң да, был эшкә шәхси ҡыҙыҡһыныу һәм профессиональ ҡараш менән тотонорға кәрәк. Шул саҡта ғына эшең матур ҙа, шәп тә килеп сығасаҡ.

Әйткәндәй, бынан бер-нисә йыл самаһы элек көнсөл әҙәмдәр төндә Йәш техниктар йортона ут төрттө. Был хәлде ауыр кисерҙек. Кемгә ҡамасаулағандыр был йорт, аңлай алмайым. Шулай ҙа эш урынһыҙ ҡалһам да, эшһеҙ ҡалманым...

### Хоккей майҙансығынан башлайбыҙ

Бер ваҡиға иҫкә төштө. Хоккей майҙансығы эшләргә теләп, бер танышым быйыл 80 тонна һыу сарыф иткән. Йәғни, ут һүндереү автомобиле цистернаһы менән иҫәпләгәндә, 8 тонналыҡ 10 цистерна. Һыуҙы сиктән тыш күп түгеүенә ҡарамаҫтан, боҙ барыбер быжыртмаҡлы, тигеҙһеҙ килеп сыҡҡан. Ахыр сиктә, миңә килгән бисара. Мин уға бары тик бер машина һыу менән дә бынамын тигән хоккей майҙансығы эшләп булыуы тураһында һөйләп бирҙем. Быны ишеткәс, егеттең күҙҙәре шарҙай булды. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, беҙҙә был эштең рәтен бик уҡ белеп еткермәйҙәр. Ниңәлер, тоталар ҙа декабрҙә һыу тундыра башлайҙар. Сатлама һыуыҡтар төшкән был ай эш өсөн иң яйһыҙ мәл. Һыуҙы үтә һыуыҡта тундырһаң, боҙҙоң сифаты юғала. Һис юғы, һыу температураһын +10, +15 градусҡа тиклем күтәрергә, шунан ғына боҙ өҫтөнә ҡойорға кәрәк. Ә 80 тонна һыуҙы нисек итеп йылытып бөтөрәһең? Декабрҙә быны эшләп булмай. Шулай булғас, бер генә юл ҡала - эште икенсе йылғаса туктатып торорға ла, көҙҙән яңынан тотонорға.

Тәбиғәтте күҙәтеп, уның менән гармонияла йәшәргә кәрәк. Шул сағында бер ниндәй ҙә уңышһыҙлыҡтарға юл ҡалмай. Ҡыҫҡаса әйткәндә, йәйҙән һай ғына кәритә формаһында майҙансыҡ ҡаҙыйһың, октябрь урталарында йылғала һыу ситтәре туңа башлаған мәлдә төндәрен ошо һай ғына соҡорға һыу ташып ҡояһың. Ул төнөн туңа, ә көндөҙ иреп, ергә һеңә. Көн һайын ошо еңел генә эште дауам итәһең. Шул ғына. Ә ноябрҙә беренсе һыуыҡтар төшһә, боҙҙа хоккей уйнарға ла мөмкин. Артабан ҡыш буйына көҙгөләй ялтырап ятҡан боҙ өҫтөн ҡарҙан таҙартып торорға ғына ҡала.

### Һырғалаҡ эшләү әтнәкәләре

Һырғалаҡ эшләр өсөн дә алдараҡ килтерелгән ысул менән оҙонса ғына боҙ майҙаны әҙерләнә. Артабан уның тирәләй ҡар ташып һалына. Әйтәйек, мин һөйрәткесем менән күрше-тирәнең ҡарын да ташыйым. Беҙҙә күршеләр һәйбәт - "ҡышын ҡар ҙа һорап алып булмай" тип әйтергә урын юҡ. Майҙансыҡтың үренә бейек кенә тау өйгәс, боролош урындарына бейеклеге 2-3 метрға еткән ҡабырғалар тундырыла. Әлбиттә, һырғалаҡты боролоштарһыҙ ҙа эшләргә була, ләкин һуңғыһы бик уҡ ҡыҙыҡлы булмай, минеңсә. Быйылғы һырғалағымды мин өс боролошло итеп яһаным. Уның формаһын схематик рәүештә аҫты-өҫкә әйләнгән һорау билдәһе менән сағыштырып булыр ине. Һөктә урынынан ултырып шыуып китәһең дә, һул яҡҡа елдерәһең. Был ваҡытта 2,5 метр бейеклегәнге борт өҫтөнә барып менәһең. Боролош тамамланған урында талғын ғына тигеҙ ергә килеп төшәһең. Артабан икенсе ҡабырға - 5 метр оҙонлоғондағы, 1,5 метр бейеклегендәге борт "көтөп" тора. Был ҡабырғаны артта ҡалдырғас, өсөнсө - аҙаҡҡы бөгөл урынынан ҡалҡып сыҡҡан боҙ өҫтөнә йәнә ике метр ярым бейеклегенә барып менәһең дә, шайылдығы сығарып, боҙ майҙаны буйлап тукталғансы елеп бараһың. Нимәһе ҡыҙыҡ: тартыу көсө һине төрлө яҡҡа ырғыта, юла һымаҡ әйләндерә - ултырып ҡына сыҙа. Спорт менән бөтөнләй таныш булмаһаң, кәрәк ерҙә кәрәк яҡҡа ауышайып өлгөрөп булмаясаҡ һәм ялпайыуың көн кеүек асыҡ. Ә өйрәнеп алһаң, хәрәкәткә килтерелгән юла ише, зыр әйләнеп, ҡабатланмаҫ тәьҫораттарға бирелеп, шыуаһың да шыуаһың. Минең һырғалаҡтың ҡабырғалары һәр береһе 3-әр метр булғанлыҡтан, ситкә сығып осоу ҡурҡынысы бөтөнләй юҡ. Был ҡанатлы кешеләргә генә ҡағылмай.

### Хәүеф һәм хәүефһеҙлек

Бындай һырғалаҡ эшләүселәр уны эшләү менән үҙҙәренә икеләтә яуаплылыҡ ала. Беренсенән, унда шыуыусы балаларҙың бер-береһенә килеп бәрелмәүен күҙәтеп тороу талап ителә. Юғиһә, кемдер трассаның урта тирәһендә шыуғысынан төшөп, ятып ҡалһа, уның артынан шыуып килеүсе кеше уға ҙур тиҙлектә килеп бәреләсәк. Иң яҡшыһы - бер-береңә тононошоп шыуыу. Балалар телендә был "паровоз" тип атала. 5 метрлыҡ ара менән шыуыу ҙа хәүефте аҙайта. Һис юғы, бәрелеү көслө булмай.

Минең һырғалаҡҡа балалар күп килә. Күрше ауылдарҙан да, алыҫыраҡ ауылдарҙан да киләләр. Ҡышҡы каникул ваҡытында, мәҫәлән, иртәнән-төнгә тиклем кеше өҙөлмәне. Мин һәр ваҡыт барыһын да ҡарап, күҙәтеп, кәрәк саҡта йығылып киткәндәрҙе тартып сығарып торҙом. Йәнә, матур итеп аңлатыу ҙа кәрәк. Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр тәкәбберләнеп, "Үҙем беләм", тип танауын күккә сөйөп, менеп китә лә, шыуған саҡта ҡолап килеп төшә. Һырғалаҡ һаҡ һәм иғтибарлы булыуҙы талап итә.

### Тәртип һәм тәртипһеҙлек

Һырғалаҡҡа эскән кешеләрҙе бөтөнләй яҡын юлатмайым. Әлбиттә, ундайҙар үҙҙәрен хас та "мөгөҙһөҙ һыйыр" итеп хис итә, тыйһаң, үпкәләп маташа. Шундайҙарҙың берәүһенә, мәҫәлән, былай тип әйткәйнем: "Кара әле, иптәш, әгәр һин ҡолап, башың менән боҙҙо ярһаң, мин уны һыу ҡойоп, киренән ямай алам да бит, ә һин башыңды ярһаң, ямап бирә алмаясаҡмын. Ғәфү ит, дуҫ, мин һине һау-сәләмәт һәм бәхетле итеп күрергә теләр инем". Был һүҙҙәрҙән һуң ир шунда уҡ ипкә килде.

Тәмәке тартҡан, көнбағыш сиртҡән кешеләр ҙә һырғалаҡ янына килә алмай. Үткәрмәйем. Сөнки сүп-сарҙарын балалар йөрөгән ергә ташлайҙар. "Минең өсөн түгел - балаларығыҙ өсөн был таҙалыҡ, тәртип", - тим. Ҡайһы берҙә төнгә икелә лә киләләр шыуырға. Әгәр үҙҙәрен алама тоталар икән, кейенеп, яндарына сығырға тура килә. Ә тәртипле кешеләр килгәнен күрһәм, сығып та тормайым. Ундайҙар матур ғына итеп күңел аса ла, шыуғыстарҙы үҙ урынына рәтләп һалып, ҡайтып китәләр. Ғәҙәттә, ҡалала йәшәп, ата-әсәһенә бер-ике көнгә тип ҡайтҡан йәштәр шулай итә. Бала саҡтарын һағына улар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына бит, Илдар ағай өлгөһөнә эйәреп, бик матур эштәр атҡарырға була. Ошо мәҡәләне уҡып, республика райондарының һәр ауылынан берәр кеше генә булһа ла дәртләнһә, Башҡортостандың һәр ауылында ноябрь айында меңләгән балаға рәхәтләнеп хоккей уйнарға йәиһә һырғалаҡ шыуырға мөмкинлек тыуасаҡ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*

# ХӘРЕФ-ӨНДӘР АТАМАҺЫ ҺӘМ...

## һандар хикмәте

Ошонда "шеш" һүҙенең дөйөм сумма мәғәнәһенә лә туҡталып китеү ҡыҙыҡ булыр. "Шеш" һүҙенең дөйөм суммаһы - 605. 5 һанының мәғәнәһен ҡарап үттек инде, шуға 600-гә генә туҡталабыҙ. Ғәрәп алфавитында был һандың исеме "ха", тағы бик ҡыҙыҡлы, тик был турала икенсе тапҡыр һөйләшербеҙ. 600 һаны 6 һанын 100-гә ҡабатлауҙан килеп сыҡҡан. Ә йөҙ һаны дөйөм эзотерикала камиллыҡты белдерә. 100 һанының хәрефе йәһүд телендә "ҡоф" тип атала. Һаны һәм әйтелеше (артикуляция урыны буйынса ла) ул беҙҙең "ҡ" хәрефенә тура килә. Хәреф исеменең һандарын ябай һандарға әйләндерһәң, 100+70+80= 1+7+8=16=1+6=7 килеп сыға. 7 Йыһандың төп универсаль һаны, йәғни, Йыһан 7 универсаль ҡанун нигеҙендә йәшәй. Был һанды кеше һаны тип тә йөрөтәләр. Ҡоф - "елкә" тигәнде аңлата, йәғни, ошонан сығып әйткәндә, биш һиҙеү тойғоһо ағзаларын әүҙемләштергәндә, өсөнсө күҙҙең - интуицияның асылыуын символлаштырыусы хәрефөн. Йогала был Агни-чакраның (йә Аджна-чакра, Трикута) асылыуы. Психофизиологик планда ул күрәҙәселек һәләте асылыу менән бәйле. Кеше үткәнде, бөгөнгөнө, киләсәкте үтә күрергә, үҙ ихтыяры менән төрлө тәнгә үтеп инергә һәләтле. Ул был осраҡта бөтөн гонаһтары юйылып, тәҡдир ҡушыуынан азат ителә. Ундай кеше эргәһендә һәр ваҡыт күңелдә тыныслыҡ тойғоһо урынлаша һәм уның эргәһендә ОМ (АУМ) вибрацияһын бар көсөндә тойорға мөмкин. Хайуандарға оҡшаш үҙен тотоуы аҡҡоштоҡо кеүек (шунда уҡ Һомай образы күҙ алдына килеп баҫа). Был Агни-чакраның нотаһы - ля. Киреһенсә уҡыһаң - ял. Аллаһы Тәғәлә донъяны яралтҡандың алтынсы көнөндә ял иткән. Ял шулай уҡ сәс, аттың ял ҡылын да иҫкә төшөрә. Был Агни-чакраның Аҡбуҙаттың исеме менән дә бәйләнеше бар. Аҡбуҙат исеме Ҡояш энергияһының төҫөн, уның исемен символлаштыра. Ҡояш энергияһының төҫө - аҡ, ә Ай энергияһының төҫө - һары. Ошонан сығып, Һарат, Аҡбуҙат атамалары килеп сыҡҡан. "Ат" һүҙе суммала шулай уҡ 10 һанын бирә: а+т (тет)=1+9-10. Агни-чакраның төҫө саф аҡ төҫтә. Ә энергияһының төҫө - асыҡ күк. Аҡбуҙаттың төҫөндә ике төҫ тә сығылыш алған.

Ошоларҙы барлап ҡараһаҡ, былтыр ахырызаман түгел, киреһенсә, яҡтылыҡ заманы килгән түгелме һуң? Сөнки беҙҙең өсөнсө күҙебеҙ асыла, ә интуиция асылыу кешенең Йыһан ҡанундары менән бер гармонияла, бер тын алышта йәшәй башлауын раҫлай. Был һандарҙың йөкмәтке мәғәнәһе яғынан ҡарағанда, һис тә, донъя бөтә, тип түгел, ә йәшәһен донъя, нурлы офоҡ, яңы бейеклек һәм бөйөклөктәр, тип әйтергә кәрәк.

Йылдың 13 һаны ла бик әһәмиәтле. Һандың суммаһы 1+3=4 һанын бирә. Дүрт һаны инде ишек тотҡаһы ғына түгел, ишектең үҙе. Тик был ишек теләһә кемде түгел, кешеләрҙе һайлап ҡына индерә. Сөнки йылдың девизы "Белем һәм наҙанлыҡ". Һандың йәһүд телендәге атамаһы "далет". Ғәрәп алфавитында "дәл" тип йөрөтөлә. Ғайса бәйғәмбәр дәлдең мәғәнәһен "мәңгелек" тип аңлатҡан. Далет атамаһының икенсе өлөшө - "эт", йәһүд телендә "ваҡыт"ты белдереп килә. "Далет", йәғни "д" өнөнөң эзотерик мәғәнәһе - "власть, хакимлыҡ итеү". Һандың исеме "арба", геометрик кәүҙәләнеше - дүртмөйөш. Ошо урында "Урал батыр" эпосына күҙ һалмайынса булмай. Был үтә йәшерен тел менән яҙылған текст "Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан бер урын" тип башлана. Һыуҙың тәрән төплө аҡыл символы булыуын ғына әйтеп китәйек тә, дүрт тарафҡа туҡталайыҡ. Боронғолар астрологияла хәҙерге кеүек түңәрәк менән түгел, ә дүртмөйөш менән эш иткән. Шуға ла текста дүрт тараф тураһында һүҙ бара. Икенсенән, 4 һаны эйәһе далеттағы "ишек"те белдерә. Күҙгә күренмәгән бик серле, теләһә кемгә асылып бармаған, һирәктәргә генә күренгән Илаһи Бөйөклөк илендәге йәншишмәгә, бәхет ҡошо Һомай иленә юл аса торған ишек. Шуға ла 13-сө йыл Йыһан ҡапҡалары асылыр йылды ла тоҫмаллайҙыр. Бәләкәй саҡта өләсәйем ахырызаман тураһында һөйләгәндә, ул дәүер миңә һис ҡурҡыныс түгел, киреһенсә, ҡыҙыҡлы, ымһындырғыс тойола ине. Быға, моғайын, өләсәйемдең йөрәгемә май булып яғылған һүҙҙәре сәбәпсе булғандыр: "Ахырызаман еткәс, Йыһан ҡапҡалары асылыр, күктә шәмдәр балҡып торор", - тип һөйләй ине ул.

2016 йылдың суммаһы 9 һанын барлыҡҡа килтерә. Ә туғыҙ һанының хәрефе т - "тет", мәғәнәһе - "йылан". Туғыҙ һанының исеме "Тшей", йәғни "ҡапҡа". Мәғәнәһе - йылан. Йылан Күк донъяһындағы органик берлектең символы. Ә органик берлек уны Йыһан энергияһы ҡеүәтләп, һуғарып торғанда ғына йәшәй ала. Тыуған 13-сө йылдың хужаһы ла көнсығыш йондоҙнамәһе буйынса аҡыллылыҡ символы булған һыу йыланы булыуы тиктәҫкә генә түгелдер. Беҙгә хәбәр биреп, айыҡ аҡыл менән уйлап эш итеп, йөрәк ҡушыуына буйһоноп йәшәргә ваҡыт еткәненә ишара түгелме икән?

Аллаһы Тәғәләнең йәншишмәһенә юлыбыҙҙы йүнәлтеп, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ инанып йәшәгән "Дин үә ғилем" лозунгыһын алға һөрөп йәшәү мәле етте. Атайым: "Ҡыҙым, кешенең биш дипломы булып та шыр наҙан булыуы мөмкин. Белем - тәрбиәлә!", - ти торғайны. Ә тәрбиәнең нигеҙ ташы - диндә. Рухи бөйөклөк тә, йәшәү мәғәнәһенең асылы ла ошо дини тәрбиә аша ғына асыла. Беҙҙең заман кешеләре бала тәрбиәләгәндә тик интеллектуаль тәрбиәне генә беренсе урынға ҡуйып килде. Шуға күрә һыңар аяҡта һикереп атлап, заман талабына ярашлы алға китә алманыҡ. Быға ҡайһы саҡта дин тигән булып, шағирҙар көлөп әйткән ҡайһы бер наҙан, "һәр фәнгә маһир муллалар" ҙа сәбәп булғандыр. Арҙаҡлы шәхес, дин ғалимы Зәйнулла Рәсүлевтән өлгө алып, йәштәрҙе дини юлда, бөгөнгө көн фәненең ҡаҙаныштарына таянып тәрбиәләү - замана ҡаҙығы. Ололарҙың "дин үә ғилем" тигән һүҙҙәрен ысынбарлыҡ тәрәнлегендә аңларға күптән ваҡыт етте бит инде.

**Бына ошоларҙы һөйләй минең яңы тыуған йылдың асылын аңларға тырышып юрауҙарым. Был йыл ошо ике ҡулды бер иткән илаһи көскә - Аллаһы Тәғәләгә таянып, Ер һәм Йыһан мөнәсәбәттәрен илаһи гармоник моң итеп йөрәккә алып, киләһе дәүергә аяҡ баҫайыҡ. Йәһүд телендә "ҡол" - "тауыш" тигәнде аңлата. Ә беҙ, башҡорттар, ерҙә Аллаһы Тәғәләнең сихри көскә эйә булған, моңло һәм дәртле, ҡеүәтле тауышы. Киләсәктә лә бәҫебеҙҙе төшөрмәйек, меңәр йыллыҡ тарихы булған Йыһан теле булырҙай телебеҙҙе, һәр саҡ тормоштағы прогресс көрәшендә беренсе булырға ярҙам иткән, мәғәнәһе - башланғыс биргән мәңгелек әсетке, ҡур, үрсем, йәшәүҙең мәғәнәле рухын, ҡуҙын, утын аңлатҡан Башҡорт тигән исемебеҙҙе түбәнһетмәйенсә, башыбыҙҙы юғары күтәреп алға атлайыҡ.**

**Гөлфирә ҠОТЛОМӨХӘМӘТОВА.**
**(Аҙағы. Башы 3-7-се һандарҙа).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

68. Бер ваҡытта ла, бер кемгә лә, бер нәмә тураһында ла зарланмағыҙ. Һеҙҙе ыңғай, энергиялы, энтузиаст, көслө кеше тип белһендәр. Даими рәүештә зарланыусы кешеләр әҙәпһеҙгә әүерелә, һәр нәмәнең кире яғын эҙләй башлай, үҙен урап алыусыларҙы ситкә тибәрәләр һәм бик һирәк кенә уңышҡа өлгәшәләр. Психологик күҙлектән ҡарағанда, тормошта бөтөн нәмә лә ике тапҡыр барлыҡҡа килә: тәүҙә кемдеңдер башында, һуңынан - ысынбарлыҡта. Шуға күрә бары тик ыңғай нәмәләргә генә иғтибар туплағыҙ. Уңышҡа табан барған юлда, берәү ҙә һеҙҙе юлығыҙҙан бора алмаһын өсөн, рух ныҡлығын һәм үҙ-үҙегеҙгә ышаныс һаҡлағыҙ. Нимәгә өлгәшергә теләгәнегеҙҙе күҙаллап, уға ныҡлы ышанығыҙ. Шул ваҡытта хыялдар тормошҡа ашасаҡ.

69. Дуҫтарығыҙҙың көсһөҙ яғын анализлағыҙ. Әгәр соҡсона башлаһағыҙ, моғайын, күп нәмә табырһығыҙ. Шуға күрә ваҡ-төйәк етешһеҙлектәргә күҙ йомоп, һәр кешенең ыңғай яғын күрә белегеҙ. Һәр кемдән нимәгәлер өйрәнергә мөмкин. Һәр кем ҡыҙыҡлы тарих һөйләй, ҡыҙыҡлы шаяртыу менән бүлешә, һабаҡ бирә ала. Аңығыҙҙы шундай белем өсөн асығыҙ һәм үҙегеҙгә күп файҙалы нәмә алырһығыҙ. Бәхетле йәшәү өсөн дуҫтарығыҙ булыуы мөһим - бигерәк тә файҙалы кәңәштәре менән бүлешеп, бергәләшеп көлөшкәндәре. Дуҫлығығыҙҙы нығытыу өҫтөндә ныҡышмал эшләгеҙ, башҡалар менән мөнәсәбәттәрегеҙҙе ныҡлы, бай һәм киң ҡырлы нигеҙҙә төҙөгөҙ. Дуҫтарығыҙҙы ҡунаҡҡа саҡырығыҙ, уларға файҙалы булырҙай китаптар бүләк итегеҙ. "Баҡсасылыҡ" ҡанунын дуҫлыҡҡа, ғөмүмән, тотош тормошҡа ҡарата ла ҡулланып була: нимә сәсһәгеҙ - шуны урырһығыҙ, шуға күрә, яҡшы дуҫтар табыр өсөн башта үҙегеҙгә шундай булырға кәрәк.

70. Изгелекле, хәстәрлекле һәм илтифатлы, ләкин ҡасан талапсанлыҡ һәм ҡыйыулыҡ күрһәтергә кәрәклеген белеү өсөн зирәк һәм әҙәпле булығыҙ. Улар - һеҙгә ихтирам килтерәсәк ныҡлы, баҫалҡы характер билдәләре. Дуҫлыҡты нығытыу һәм тирә-яҡтағылар менән мөнәсәбәттәрҙе нисек яҡшыртыу тураһында китаптар уҡыу ҙа бик файҙалы. Бының өсөн яҡшы тыңлаусы булырға, башҡалар менән ысынлап ҡыҙыҡһыныуығыҙҙы күрһәтә белергә һәм үҙ-ара аралашыуҙың башҡа сифаттарын үҫтерергә кәрәк. Әммә был өлкәлә ысынлап уңыш ҡаҙаныу өсөн аҡылдың һәм зирәклектең үҫешкә мохтаж сифаттар икәнен аңлау зарур. Кеше мөнәсәбәттәре психологияһында белгес булығыҙ һәм кешеләрҙең асылын аңларға тырышығыҙ. Бер ваҡытта ла башҡаларҙы үҙ маҡсаттарығыҙҙа файҙаланмағыҙ һәм үҙегеҙҙе сәйәси уйындарға ылыҡтырырға мөмкинлек бирмәгеҙ. Буш ғәйбәттәр һәм контора интригаларынан юғарыраҡ булығыҙ, әммә уларҙың барыһы ла һеҙҙең артығыҙҙа бара икәнен онотмағыҙ һәм унда нимә барғанын белеп тороғоҙ. Һәр ысын лидер шулай эшләй.

**Робин ШАРМА.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Гайморитты "иретеү"

Кешенең иң теңкәгә тейгән сирҙәренең береһе - гайморитты "иретеү" менән тәндәге ауырыуҙар тулыһынса еңелде. Мин хатта уның организмыма ҡасан килеп ингәнен дә иҫләмәйем. Егерме йыл элек ҡайһы бер ваҡыт танауымдан тарыға оҡшаш ваҡ ҡына ярмаларҙың сығыуына шаһит булғайным. Улар насар еҫле һәм танау ҡыуышлығында ят есем барлығына ишара ине. Ағайым менән кәңәшләшеп, хроник гайморит менән сирләүемде асыҡланым. Ошо ваҡытта аңлауымса, тап ул минең температурамдың ҡапыл күтәрелеүенә, баш ауыртыуына сәбәпсе булған.

Гайморит - булған ауырыуҙар араһынан тәнемде ташлап китеүсе иң һуңғы сир ине. Ит, балыҡ, йомортҡа ашауымды туҡтатыуыма 15-се йыл киткәйне. Урамда февраль. Ҡапыл температурам күтәрелде. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң ул төштө, ләкин тәнемдә көслө ҡалтырау башланды. Ауырыуға иғтибар итмәйенсә, дәрес бирҙем, өйҙәге ғәҙәти эштәрҙе башҡарырға тырыштым. Уҡыусылар менән башҡа уҡытыусылар шөғөлләнгән ваҡытта уҡытыусылар бүлмәһенә барып, саҡ ҡына булһа ла диванда ятып торорға тырыштым. Табиптарға мөрәжәғәт итмәнем, бер төймә лә дарыу ҡапманым.

Юғары температура менән тәндең ҡалтырауы өс көн аралашып дауам итте. Дүртенсе көндә танауымдан ҡуйы лайла аға башланы. Был тарих өс көн дауам итте. Ошо ваҡыт эсендә хроник гаймориттың эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашҡан 35 ҡулъяулыҡ йыйылып китте. Мине нимә аптыратты - танау ҡыуышлығы кеүек бәләкәй генә участкаға шунсама күп лайланың һыйыуы.

Гайморитты "иреткәндән" һуң сәйер еңеллек тойҙом. Әйтерһең дә, башым еңеләйеп кенә ҡалманы, ә бәләкәсәйҙе лә һымаҡ. Был сирҙе еңеү, ниһайәт, тәнемдән барлыҡ ауырыуҙарҙы тулыһынса ҡыуып сығарыуға килтерҙе. Шунан һуң, Аллаға шөкөр, ундай көслө сирле торошта булғаным юҡ.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**



## 25 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
